2. Х.Ғ.Йосопов, З.Ғ. Ураҡсин, М.Х.Әхтәмов.
3. Н.Х.Мәҡсүтова, С.Ф.Миржанова, Т.М.Ғарипов һ.б.

**Занятие №32. Башҡорт теле лексикологияһы һәм фразеологияһы буйынса ҡабатлау.**

1. Бирелгән теоретик белемде барлау.
2. Практик белемде нығытыу.

## Морфемика. Морфонология. Һүҙьяһалыш.
## Семинар дәрестәре пландары

**Семинар № 1.**
**Тема: Морфемика**

1. Морфемиканың төп төшөнсәләре.
2. Тамыр морфемалар, уларҙың төрҙәре.
3. Ялғау морфемалар, уларҙың төрҙәре:

А) һүҙ яһаусы аффикстар;
Б) форма яһаусы аффикстар;
В) һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар.

**Семинар № 2.**
**Тема: Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшө**.

1. Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөндәге үҙгәрештәр:

А) ябайлашыу;
Б) тарҡалыу;
В) ҡатмарланыу;
Г) алмашыныу.
*(һәр бер үҙгәреш төрөнә 5-әр миҫал килтерергә).*

**Семинар № 3.**
**Тема: Морфонология**

1. Морфонологик күренештәр:

А) һүҙ яһаусы нигеҙҙең ҡыҫҡарыуы;

Б) морфемалар араһында фонемалар ҡуйылыу;

В) морфемаларҙың тәңгәлләшеүе;

Г) фонемаларҙың сиратлашыуы;

2. Башҡорт телендәге морфонемаларҙың төрҙәре.

Үҙ аллы эш

Н.Х.Ишбулатов менән М.Х.Әхтәмовтың "Хәҙерге башҡорт теле. Фонетика, графика, орфография, орфоэпия, грамматиканың төп төшөнсәләре, морфемика, морфонология, һүҙьяһалыш: Уҡыу ҡулланмаһы" китабындағы (Өфө: БДУ, 2002) 9-сы таблицаға күҙәтеү яһарға (173-176-сы биттәр).

**Семинар № 4.**

**Тема: Башҡорт теленең һүҙьяһалышы.**

1. Һүҙ төҙөлөшөн һәм һүҙҙәрҙең яһалыу юлдарын өйрәнеүсе фән булыу яғынан һүҙьяһалыш (дериватология).

2. Һүҙьяһалыштың төп төшөнсәләре (тамыр, яһалма һүҙҙәр, нигеҙ, яһаусы нигеҙ, һүҙ яһаусы сара, һүҙьяһалыш мәғәнәһе, һүҙьяһалыш тибы, һүҙьяһалыш юлдары һәм ысулдары, һүҙьяһалыш ояһы).

3. Башҡорт телендә һүҙьяһалыштың лексик юлы.

4. Башҡорт телендә һүҙьяһалыштың лексик-семантик юлы.

5. Башҡорт телендә һүҙьяһалыштың фонологик юлы.

**Семинар № 5.**

**Тема: Башҡорт телендә һүҙьяһалыштың морфематик ысулы.**

1. Аффиксация ысулы.

2. Нигеҙҙәр ҡушылыу ысулы.

3. Нигеҙҙәр ишләшеү ысулы.

4. Редупликация ысулы.

5. Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу ысулы. Аббревиация.

**Семинар № 6.**

**Тема: Башҡорт телендә һүҙьяһалыштың лексик-грамматик, лексик-синтаксик юлдары.**

1. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәренең башҡа һүҙ төркөмдәренә күсеүе.

2. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең башҡа һүҙ төркөмдәренә күсеүе.

3. Һүҙбәйләнештәрҙең лексикалашыуы ысулы.

4. Һүҙбәйләнештәрҙең лексикалашыу + аффиксация ысулы.

**Семинар № 7.**

**Тема: Башҡорт телендә семасиологик күренештәр**.

1. Һүҙьяһалышта полисемия.

2. Һүҙьяһалышта омонимия.

3. Һүҙьяһалышта синонимия.

4. Һүҙьяһалышта антонимия.

**Семинар № 8.**

**Тема: Һүҙ төркөмдәренең яһалышы.**

1. Исемдәрҙең яһалышы:

А) фонологик юл менән исемдәр яһалыу;

Б) морфематик юл менән исемдәр яһалыу;

В) яһалма исем;

2. Исем, ҡылым, сифат, һан, өноҡшаш һүҙҙәрҙән исем яһаусы продуктив һәм продуктив булмаған аффикстар.

3. Лексик-семантик, лексик-синтаксик юлдар менән исемдәр яһалыу.

4. Сифаттарҙың яһалышы:

А) фонологик юл менән сифаттар яһалыу;

Б) морфематик юл менән сифаттар яһалыу;

5. Исем, ҡылым, сифат, һан, рәүеш, модаль һүҙҙәрҙән сифат яһаусы продуктив һәм продуктив булмаған аффикстар.

6. Лексик-грамматик (адъективация), лексик-синтаксик юл менән сифаттар яһалыу.

**Семинар № 9.**

**Тема: Һүҙ төркөмдәренең яһалышы.**

1. Ҡылымдарҙың яһалышы:

А) фонологик юл менән ҡылымдар яһалыу;

Б) морфематик юл менән ҡылымдар яһалыу;

2. Исем, ҡылым, сифат, һан, алмаш, рәүеш, ымлыҡ, модаль һүҙҙәрҙән һәм өноҡшаш һүҙҙәрҙән ҡылым яһаусы продуктив һәм продуктив булмаған аффикстар.

3. Башҡорт телендә һөйләмдәрҙең лексемалашыуы аша ҡушма ҡылымдарҙың яһалышы.

4. Лексик-семантик юл менән ҡылымдар яһалыу.

**Семинар № 10.**

Тема: Һүҙ төркөмдәренең яһалышы.

1. Рәүештәрҙең яһалышы:

А) фонологик юл менән рәүештәр яһалыуы;

Б) морфематик юл менән рәүештәр яһалыуы;

2. Исем, ҡылым, сифат, һан, алмаш, рәүештәрҙән рәүештәр яһалыу, аффикстары.

3. Морфологик ныҕынған рәүештәр, ҡушма рәүештәр, теҙмә ҡушма рәүештәр, эйәртеүле ҡушма рәүештәр.

4. Лексик-синтаксик юл менән рәүештәр яһалыуы. Адвербиализация.

5. Башҡорт телендә рәүештәрҙең һүҙ яһаусы нигеҙ булараҡ ҡулланылышы.

**Семинар № 11.**

Тема: Һүҙ төркөмдәренең яһалышы.

1.Һандар яһалышы.

2.Алмаштар яһалышы.

3.Ымлыҡ, модаль һүҙ, өноҡшаш һүҙҙәрҙең яһалышы (төрлө ысулдар менән яһалыу осраҡтарын ҡарарға).

4.Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең яһалыуы: аффиксация һәм конверсия. Уларҙың һүҙ яһаусы нигеҙ булараҡ ҡулланылыуы.

**Семинар №1**

**Тема.Исемдәрҙең һан һәм эйәлек категорияла**ры

1. Исем тураһында дөйөм төшөнсә.
2. Исемдәрҙең лексик-семантик төркөмсәләре.
3. Исемдәрҙә енес категорияһы.
4. Исемдәрҙең һан категорияһы, уның грамматик бирелеше.Индивидуаль күплек һәм коллектив күплек мәғәнәләре. Күплек аффикстарының эмоциональ һәм стилистик мәғәне биҙәктәре.Күплек мәғәнәһенең башҡа юлдар менән бирелеүе.
5. Эйәлек категорияһының төп мәғәнәһе. Эйәлек заты аффикстары.

6. Эйәлек мөнәсәбәтенең синтаксик һәм морфологик-синтаксик юл менән бирелеше.

<u>Үҙ аллы эштәр</u>:

1) Художестволы әҙәбиәттән берлек формаһындағы исемдәрҙең күплек мәғәнәһен белдереүенә миҫалдар яҙып алырға.

2) Берлек һәм күплек формаларҙа эйәлек затының бөтә төр аффикстарын күрһәткән таблица төҙөргә.

**Семинар №2**

**Тема. Исемдәрҙең килеш категорияһы.Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы. Исемдәрҙең һөйләмдәге синтаксик функцияһы**

1. Башҡорт телендә килеш системаһы. Килештәрҙең грамматик мәғәнәһе һәм белдереү саралары.
2. Килештәрҙе классификациялау.
3. Килештәр системаһында билдәлелек-билдәһеҙлек категориялары.
4. Килештәрҙең мәғәнәләре һәм синтаксик функциялары.
5. Башҡорт телендә хәбәрлек категорияһы, уның мәғәнәһе. Был категорияның хәҙерге башҡорт телендә ҡулланылыу дәрәжәһе, грамматик һәм синтаксик функцияһы.
6. Һүҙҙә хәбәрлек аффикстарының килеү урыны. Был аффикстарҙың башҡа һүҙ төркөмдәренә ҡушылыуы.
7. Башҡорт телендә исемдәрҙең һөйләмдә үтәгән синтаксик вазифалары:

А) эйә

Б) тултырыусы

В) хәбәр

Г) аныҡлаусы

Ғ) хәл

<u>Үҙ аллы эш</u>: 1. Тыуған яҡтың тәбиғәте менән бәйле 6 исемде килештәр буйынса үҙгәртергә, һығымта яһарға.

1. Берлек һәм күплек формаларҙа хәбәрлек затының бөтә төр аффикстарын күрһәткән таблица төҙөргә.
2. Художестволы әҙәбиәттән исемдәрҙең төрлө синтаксик функцияһын күрһәткән 5 һөйләм яҙып алырға, һөйләмдәрҙе тикшерергә.

**Семинар №3**

**Тема. Сифат. Сифат дәрәжәләре**

1. Сифаттарҙың лексик-грамматик мәғәнәләре.
2. Сифат менән рәүештең оҡшаш билдәләре һәм айырмалыҡтары.
3. Семантик билдәләре һәм морфологик үҙенсәлектәре буйынса сифаттарҙың төрҙәре: төп һәм шартлы сифаттар. Улар араһындағы мәғәнәүи һәм формаль айырма.
4. Төп сифаттарҙың дәрәжәләре. Дәрәжәләрҙең мәғәнәүҙенсәлектәре, бирелеү юлдары.

<u>Үҙ аллы эштәр</u>:

1. «Башҡортса-русса һүҙлек» (М., 1996) буйынса төҫтәрҙе белдергән һүҙҙәрҙе тәжемәһе менән күсереп алырға, башҡорт эквиваленттары менән һүҙбәйләнештәр төҙөргә.
2. Художестволы әҙәбиәттән төп һәм шартлы сифаттар (төп сифаттарҙың төрлө дәрәжәләрендә) булған һөйләмдәр яҙып алырға, тикшерерге.

**Семинар №4**

**Тема. Һүҙ төркөмө булараҡ һандар. Цифрҙар. Нумератив һүҙҙәр**

1. Һандарҙың лексик-грамматик мәғәнәләре, морфологик билдәләре.
2. Һан төркөмсәләре.
3. Һандарҙың һөйләмдәге синтаксик функцияһы.
4. Ғәрәп һәм рим цифрҙары хаҡында.
5. Нумератив һүҙҙәр, уларҙың мәғәнә үҙенсәлектәре.
6. Цифрҙарҙың, һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.

Үҙ аллы эштәр:

1. «Башҡорт теленең орфография һүҙлеге» (Өфө, 1998) буйынса һандарҙы дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен конспектларға.

2. Башҡорт теленең нумератив һүҙҙәре менән һүҙбәйләнештәр төҙөргә (кәмендә 15 һүҙбәйләнеш).

**Семинар №5**

**Тема. Алмаштар**

1. Алмаштарҙың семантик, морфологик билдәләре.
2. Алмаштарҙың башҡа һүҙ төркөмдәренә мөнәсәбәте.
3. Алмаштарҙың лексик-грамматик төркөмсәләре.
4. Зат һәм күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреүүҙенсәлектәре.
5. Алмаштарҙың тарихи үҫеше.

Үҙ аллы эш: алмаш төркөмсәләренең һәр береһенә миҫал яҙырға (һөйләм эсендә ҡулланылыу үҙенсәлеге).

**Семинар № 6,7**

**Тема. Ҡылым**

1-се дәрес

1. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ категорияһы. Уның мәғәнәһе һәм төп морфологик сараһы.
2. Ҡылымдың күсемлелек-күсемһеҙлек категорияһы.
3. Ҡылымдың зат һәм һан категорияһы.
4. Ҡылымдың йүнәлеш категорияһы.
5. Башҡорт телендәкылым йүнәлештәре:
   - Төп йүнәлеш;
   - Ҡайтым йүнәлеше;
   - Уртаҡлыҡ йүнәлеше;
   - Төшөм йүнәлеше;
   - Йөкмәтеү йүнәлеше;
6. Йүнәлеш аффикстарының һүҙьяһалышҡа мөнәсәбәте.
7. Затлы форма булыу яғынан һөйкәлеш категорияһы.
8. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары: төп мәғәнәһе, формаль күрһәткестәре.
9. Хәбәр һөйкәлешенең заман формалары: хәҙерге, билдәле үткән,билдәһеҙ үткән, тамамланған үткән, билдәле элек үткән, билдәһеҙ элек үткән. Билдәһеҙ ҡабатлаулы үткән, билдәһеҙ борон үткән, билдәле борон үткән, билдәле киләсәк, билдәһеҙ киләсәк замандар. Заман формаларының төрҙәре. Заман формаларының стилистик ҡулланылышы.

2-се дәрес

1. Бойороҡ һөйкәлешенең мәғәнәһе, зат-һан менән үҙгәреше.
2. Шарт һөйкәлешенең мәғәнәһе, уның формалары.
3. Фараз итеү (ихтималлыҡ) һөйкәлеше.
4. Теләк һөйкәлешенең синтетик һәм аналитик формалары, уларҙың яһалышы һәм мәғәнәһе.

5. Ниәт-маҡсат һөйкәлешенең мәғәнәһе, үҙгәреүүҙенсәлектәре.
6. Затһыҙ форма булыу йәһәтенен ҡылым төркөмсәләре.
7. Исем ҡылым.
8. Сифат ҡылым.
9. Хәл ҡылымдың рәүеш һәм ҡылым билдәләре.
10. Уртаҡҡылым (инфинитив).
11. Ҡылымдарҙың модаллек категорияһы.

**Семинар №8**

**Тема. Рәүеш**

1. Рәүештең лексик-грамматик мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре.
2. Рәүештерҙең мәғәнә буйынса төркөмсәләре.
3. Рәүештәрҙең яһалышы, дөрөҫ яҙылышы.
4. Рәүештәрҙең сағыштырыу һәм артыҡлыҡ дәрәжәләре.
5. Башҡа һүҙ төркөмдәренең рәүешләшеүе.

<u>Үҙ аллы эш</u>: художестволы әҙәбиәттән рәүештәргә миҫалдар килтерергә.

**Семинар №9**

**Тема: ярҙамсы һүҙҙәр**

1. Һүҙ төркөмө булараҡ теркәүестәрҙең үҙенсәлеге, грамматик функциялары.
2. Теркәүестәрҙе төркөмләү.
3. Бәйләүестәрҙең мәғәнәүҙенсәлектәре һәм синтаксик функциялары.
4. Киҫәксәләрҙеңүҙенсәлеге һәм грамматик функциялары.
5. Модаль һүҙҙәрҙең мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре һәм синтаксик функциялары.
6. Инеш модаль һүҙҙәр һәм предикатив модаль һүҙҙәр.
7. Ымлыҡтарҙың семантик һәм грамматик үҙенсәлектәре.
8. Мәғәнә яғынан ымлыҡтарҙың төрҙәре.
9. Оҡшатыу һүҙҙәренең мәғәнәүи үҙенсәлектәре.

<u>Үҙ аллы эш</u>: ярҙамсы һүҙҙәрҙең һәр төрөнә миҫалдар килтерергә.

**Семинар №1.**

**Тема: Синтаксис фәне. Уның йүнәлештәре**

1. Синтаксис фәне тураһында. Уның өйрәнеү обьекты, маҡсаты, бурыстары.
2. Синтаксис һәм логика. Һөйләм һәм фекерләү араһындағы мөнәсәбәт.
3. Синтаксис фәнендә төрлө йүнәлештәр.
4. Һөйләм тураһында төшөнсә, уның төп үҙенсәлектәре: предикативлыҡ һәм модаллек.

**Семинар № 2.**

Тема: **Һүҙбәйләнеш. Уның һүҙҙәрҙән һәм һөйләмдән айырмаһы. Эйәртеүле һүҙбәйләнештәр**

1. Һүҙбәйләнеш тураһында төшөнсә. Һүҙбәйләнеш – лексик-синтаксик берәмек. Һүҙбәйләнештең төҙөлөшө. Һүҙбәйләнештең һүҙҙән һәм һөйләмдән айырмаһы.
2. Һүҙбәйләнеш компоненттарын үҙ-ара бәйләүсе саралар.
3. Эйәртеүле һүҙбәйләнеш төрҙәре.
4. Эйәртеүсе киҫәге исем һүҙбәйләнештәр.
5. Эйәртеүсе киҫәге ҡылым һүҙбәйләнештәр.
6. Эйәртеүсе киҫәге сифат, һан, алмаш һүҙбәйләнештәр.
7. Эйәртеүсе киҫәге рәүеш, модаль һүҙле һүҙбәйләнештәр.

**Семинар № 3.**
Тема: **Һүҙбәйләнеш. Эйәртеүле бәйләнеш төрҙәре һәм саралары**
1. Башҡарылыу бәйләнеше.
2. Ярашыу бәйләнеше.
3. Һөйкәлеү бәйләнеше.
4. Йәнәшәлек бәйләнеше.
5. Төҙөлөшө буйынса һүҙбәйләнештәрҙең төрҙәре.

**Семинар № 4.**
Тема: **Һөйләмдең баш киҫәктәре**
1. Эйә, уның төрҙәре һәм морфологик бирелеше.
2. Хәбәр, уның төрҙәре һәм морфологик бирелеше.
3. Эйә менән хәбәрҙең ярашыу, ярашмау осраҡтары.

**Семинар № 5.**
Тема: **һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре**
1. Аныҡлаусы. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар.
2. Тултырыусы. Тура һәм ситләтелгән тултырыусылар, уларҙың морфологик бирелеше.
3. Хәлдәр, уларҙың мәғәнәүи төрҙәре һәм бирелеше (ваҡыт хәле, урын хәле, сәбәп хәле, кире хәл, шарт хәле, күләм-дәрәжә хәле).

**Семинар № 6.**
Тема: **Һөйләмдең тиң киҫәктәре**
1. Һөйләм киҫәктәренең тиң булыу шарттары. Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр.
2. Тиң эйәләр, тиң хәбәрҙәр.
3. Тиң тултырыусылар, тиң хәлдәр, тиң аныҡлаусылар.
4. Һөйләмдең детерминант киҫәктәре.

**Семинар № 7.**
Тема: **Һөйләм киҫәктәренең айырымланыуы**
1. Һөйләм киҫәктәренең айырымланыуы. Һөйләм киҫәктәренең айырымланыу шарттары.
2. Айырымланған аныҡлаусы, өҫтәлмәлек.
3. Айырымланған тултырыусы.
4. Айырымланған хәлдәр.
5. Хәл әйтемдәренең грамматик төҙөлөшө. Һөйләм эсендә урынлашыу тәртибе. Хәл әйтемдәренең айырымланыу, айырымланмау мәсьәләһе.

**Семинар № 8.**
Тема: **Бер составлы һөйләмдәр.Тулы һәм кәм һөйләмдәр**
1. Билдәле эйәле һөйләмдәр.
2. Билдәһеҙ эйәле һөйләмдәр.
3. Дөйөм эйәле һөйләмдәр.
4. Эйәһеҙ һөйләмдәр.
5. Инфинитив-модаль һөйләмдәр.
6. Атама һөйләмдәр.
7. Кәм, эллиптик һөйләмдәр, һүҙ-һөйләмдәр.

**Семинар № 9.**

Тема: **Ябай һөйләмдә һүҙ тәртибе**

1. Ябай һөйләмдә һүҙ тәртибенең функциялары.
2. Баш киҫәктәрҙең ыңғай һәм кире (инверсион) тәртибе.
3. Эйәрсән киҫәктәрҙең урынлашыу тәртибе.
4. Индермә конструкциялар.
5. Өндәш һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр. Инеш һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр, уларҙың һөйләмдә урынлашыу тәртибе.

**Семинар № 10.**

Тема: **Һөйләмдәрҙең функциональ-коммуникатив һәм эмоциональ төрҙәре**

1. Хәбәр һөйләм.
2. Һорау һөйләм.
3. Бойороҡ-өндәү һөйләм.
4. Тойғоло һөйләм.

**Семинар № 1.**

**Тема: Ҡушма һөйләмдәрҙе билдәләү. Уларҙың башҡорт тел ғилемендә классификацияһы**

1.Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә, ҡушма һөйләмдең ябай һөйләмдән айырмаһы, уларҙы бер-береһенән айырыусы билдәләр.
2. Башҡорт тел ғилемендә ҡушма һөйләмдәрҙе өйрәнеү тарихы.
3. Башҡорт тел ғилемендә ҡушма һөйләмдәрҙең классификацияһы, бүленеше.

**Семинар № 2.**

**Тема: Ҡушма һөйләм киҫәктәренең үҙ ара бәйләнеү юлдары**

1.Ҡушма һөйләм киҫәктәренең мәғәнәүи, грамматик, структур һәм интонацион бәйләнеше.
2. Ҡушма һөйләмдәрҙә теҙмә бәйләнеш ( теркәүесле һәм теркәүесһеҙ).
3.Ҡушма һөйләм киҫәктәренең үҙ ара эйәртеүле бәйләнеше. Дөйөм характеристика.

**Семинар № 3.**

**Тема: Эйәрсән һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар.**

1.Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе синтетик саралар ( синтетик юл менән бәйләнеш).
2.Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе аналитик саралар (аналитик юл менән бәйләнеш).

**Семинар № 4.**

**Тема: Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә аналитик юл менән бәйләнеше.**

1. Баш һөйләмгә алмаштар (һорау, күрһәтеү) менән бәйләнгән эйәрсән һөйләмдәр, уларҙың үҙенсәлектәре.
2. Баш һөйләмгә теркәүестәр, теркәүес һүҙҙәр менән бәйләнгән эйәрсән һөйләмдәр, уларҙың үҙенсәлектәре.
3. Баш һөйләмгә интонация менән бәйләнгән эйәрсән һөйләмдәр, уларҙың үҙенсәлектәре.

**Семинар № 5.**

**Тема: Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә синтетик юл менән бәйләнеше.**

1. Баш һөйләмгә аффикстар менән бәйләнгән эйәрсән һөйләмдәр, уларҙың үҙенсәлектәре.

2. Баш һөйләмгә бәйләүес һәм бәйләүес һүҙҙәр менән бәйләнгән эйәрсән һөйләмдәр, уларҙың үҙенсәлектәре.

3. Баш һөйләмгә йәнәшә тороп (һөйләм тәртибе) бәйләнгән эйәрсән һөйләмдәр, уларҙың үҙенсәлектәре.

**Семинар № 6.**

**Тема: Аналитик һәм синтетик төҙөлөшлө эйәрсән һөйләмдәрҙең синонимлығы.**

1. Синтаксик конструкцияларҙың синонимлығын билдәләүсе критерийҙар.

2. Эйәрсән эйә, хәбәр, тултырыусы һәм аныҡлаусы һөйләмдәрҙең аналитик, синтетик төҙөлөшлө һәм ябай һөйләм вариантындағы синонимдары, уларҙың төҙөлөшөн үҙгәртеү юлдары.

3. Эйәрсән хәл һөйләмдәрҙең аналитик , синтетик төҙөлөшлө һәм ябай һөйләм вариантындағы синонимдары, уларҙың төҙөлөшөн үҙгәртеү юлдары.

**Семинар № 7.**

**Тема: Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең мәғәнәүи (семантик, функциональ) классификацияһы.**

1. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе мәғәнәүи яҡтан билдәләүҙең критерийҙары, принциптары.
2. Эйәрсән эйә, эйәрсән хәбәр һөйләмдәр.
3. Эйәрсән тултырыусы, эйәрсән аныҡлаусы һөйләмдәр.

**Семинар № 8.**

**Тема: Эйәрсән хәл һөйләмдәр.**

1. Эйәрсән ваҡыт һөйләмдәр.

2.Эйәрсән урын һөйләмдәр.

3. Эйәрсән сәбәп һөйләмдәр.

**Семинар № 9.**

**Тема: Эйәрсән хәл һөйләмдәр.**

1. Эйәсән маҡсат һөйләмдәр.

2. Эйәрсән күләм-дәрәжә һөйләмдәр.

3. Эйәрсән рәүеш, сағыштырыу һөйләмдәр.

4. Эйәрсән шарт һөйләмдәр.

5. Эйәрсән кире һөйләмдәр.

**Семинар № 10.**

**Тема: Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар.**

1. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр.

2. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр.

3. Теҙемдәр, уларҙың бүленеше.

**Семинар № 11.**

**Тема: Сит телмәр.**

1. Сит телмәр тураһында төшөнсә, уның төрҙәре.

2. Тура телмәр (монолог, диалог, полилог, цитата), уларҙың грамматик үҙенсәлектәре.

3. Ситләтелгән телмәр, уның грамматик үҙенсәлектәре.

4. Уртаҡ телмәр, уның грамматик үҙенсәлектәре.

**Семинар № 12.**

**Тема: Башҡорт теленең пунктуацияһы.**

1. Башҡорт теленең пунктуацияһы,уның нигеҙҙәре, тарихы.
2. Нөктә, өтөр, нөктәле өтөр билдәләренең ҡуйылыу осраҡтары, ҡағиҙәләре.
3. Һыҙыҡ, ике нөктә һәм башҡа тыныш билдәләренең

Ҡуйылыу осраҡтары, ҡағиҙәләре.

**Семинар № 13.**

**Тема: Текст синтаксисы.**

1.Текст тураһында төшөнсә, башҡорт тел ғилемендә уның өйрәнелеү тарихы.
2. Йөкмәткеһе һәм күләме буйынса текст төрҙәре.
3.Тексттың төҙөлөшө, композицияһы.
4. Текстағы айырым һөйләмдәрҙе бәйләүсе лексик һәм грамматик саралар.

## Задания для контрольной работы

1. Ответ на вопрос развернутый, с примерами.
2. Ответ на вопрос развернутый, с примерами.
3. Лексико-семантический анализ подчеркнутых слов.

## Лексико-семантический анализ слова

1. Һүҙҙең һөйләмдәге лексик мәғәнәһен билдәләп, уның бер йәки күп мәғәнәлә булыуын асыҡларға. (Әгәр һүҙ күп мәғәнәле булһа, уның бер нисә мәғәнәһенә һүҙбәйләнеш йәки һөйләм эсендә миҫал килтерергә).

2. Һүҙҙең тура әллә күсмә мәғәнәлә ҡулланылғанмы икәнен билдәләргә.

3. Һүҙҙең лексик һәм лексик-грамматик омонимы булыу-булмауҙы билдәләргә. (Әгәр булһа, уларҙың мәғәнәләрен асыҡлап, шулар менән һүҙбәйләнеш йәки һөйләм эсендә миҫал килтерергә).

4. Һүҙҙең синонимы булыу-булмауҙы асыҡларға. (Әгәр синонимы йәки синонимдары булһа, уларҙы күрһәтергә).

5. Һүҙҙең антонимы булыу-булмауҙы билдәләргә. (Әгәр булһа, антоним иштәргә бер үк һүҙ менән һүҙбәйләнештәр килтерергә.

6. Һүҙгә килеп сығышы яғынан характеристика бирергә. (Уның төп башҡорт һүҙеме, әллә үҙләштерелгән һүҙме икәнен билдәләп, үҙләштерелгән булһа – ҡайһы телдән үҙләштерелеүен асыҡларға).

7. Һүҙгә актив һәм пассив ҡулланылыш күҙлегенән характеристика бирергә. (Әгәр һүҙ иҫкергән булһа – уның тарихи һүҙме, әллә архаизммы икәнен, яңы һүҙ булһа – ҡайһы осор неологизмы булыуын асыҡларға).

8. Һүҙгә ҡулланылыш сфераһы күҙлегенән характеристика бирергә. (Әгәр ҙә һүҙ сикле ҡулланылышлы булһа – уның диалект лексикаһынамы, жаргон лексикаһынамы әллә профессиональ-терминологик лексикағамы ҡарағанын асыҡларға).

9. Һүҙҙең ниндәй стилистик ҡатламға (битараф лексикағамы, һөйләү телмәре лексикаһынамы, әллә яҙыу телмәре лексикаһынамы) ҡарағанлығын билдәләргә. (Әгәр һүҙ яҙыу телмәре лексикаһына ҡараһа – уның төрөн асыҡларға).

10. Шул һүҙ менән фразеологик берәмектәрҙең булыу-булмауын билдәләргә. (Әгәр булһа – миҫал килтерергә).

Иҫкәрмәләр:

4. Һүҙгә лексик анализ телдән дә, яҙма рәүештә лә булырға мөмкин.
5. Һүҙгә характеристика бәйләнешле текст рәүешендә булырға тейеш.
6. Анализлана торған һүҙ башланғыс формала алына.

I вариант

1. Башҡорт теленең лексикологияһы.

2. Лексиканы өйрәнеүҙең мөһим сығанағы булараҡ һүҙлектәр.

3. *«Өсөнсө дәүер» – юғарыла әйтелгәнсә, ике телдә сығып килгән газеты укыусылар араһында яратмаусылык тыуғас, йәки икенсе төрлө итеб әйткәндә, башкорт массаһына башкорт телендә әҙәбиәт төҙөү кәрәклеге нык һиҙелгәс, Башкортостан хөкүмәте һәр ике телдә лә газета сығарырға карар яһаб шуны ғәмәлгә куйҙы. Бына был һуңғы дәүерҙе «Башкортостан» газетаһының бер йылы тиб атайбыҙ»...* («Башҡортостан» гәз, 1924, № 95).

II вариант

1. Башҡорт фразеологияһы.
2. «Башҡорт теленең һүҙлеге» (М., 1993, 2 томда): эпидигматика (семантик структура) һәм этимологик характеристика.
3. *Быуаттар төпкөлөнән киңәйә барған көслө ағым булып төрки әҙәбиәттәре, әҙәби телдәре һәм мәҙәниәттәре ағыла. Яңы быуат алдында, заман халыктары аякка баҫкан осорҙа, ул (ағым) яңы әҙәби телдәрҙе һәм мәҙәниәттәрҙе тукландырыусы айырым йылғаларға һәм култыктарға айырыла. Бөтә ошо йәнле динамик процесты, уның сығанағынан башлап, иғтибар менән өйрәнеү – төрки тел ғилеменең иң мауыктырғыс мәсьәләһе. Халыктар тарихында тел һәм мәҙәниәт бик нык бәйләнгән – бер төшөнсә билдәле кимәлдә икенсеһен билдәләй. Был бәйләнештең формалары һәм төрҙәре төрлөсә була ала. Уларҙың береһе – әҙәби телдең һәм рухи мәҙәниәттең бер-береһенә мөнәсәбәте, уларҙың тарихында башланғыс (милләткә тиклем) һәм һуңғы (милли) периодтарҙы айырырға кәрәк. Башланғыс осорға арналған тема гуманитар фәндәр өсөн сағыштырмаса яңы* (Тенишев Э.Р. «Тел һәм мәҙәниәт»).

III вариант

1. Башҡорт телендә синономия, синонимик рәт.
2. Башҡорт теленең семонимик һүҙлектәре (сағыштырма анализ): синонимдар һәм антонимдар һүҙлектәре.
3. *Яҙыусыларҙың әҫәрҙәге жанрҙары, күләмдәре яғынан ни тиклем төрлө булһа, уларҙағы телдең һынлылығы ла, хәл-вакиғаларҙы һүрәтләү оҫталыктары ла, телмәрҙәге тәбиғилек тә шуныңса төрлөләр. Һәр кем әҫәрендә тел мәсьәләһен хәл итеүгә үҙенең бөтә һәләте, таланты, эшмәкәрлеге, тырышлығы, күндәмлеге, хатта мөнәсәбәте кимәленән якын килә. Мәҫәлән, бигерәк тә һуңғы тиҫтә, тиҫтә ярым йыллап вакыт эсендә Р.Солтангәрәев үҙенең нескә телле күркәм әҫәрҙәрендә һәм ялкынлы, тәрән йөкмәткеле публицистикаһында башкорт әҙәби теленең һөйләм төҙөлөшөндә быға тиклем анык кына билдәле булмаған үҙенсәлекле мөмкинлектәрҙе асты*(Псәнчин В.Ш. «Әҙәби тел – нормаға һалынған тел»).

IV вариант

1. Башҡорт телендә антонимия. Саф антонимдар.
2. Фразеолгик һүҙлектәр.
3. *Ф.Энгельстың был фекерен беҙ алтай телдәре миҫалында ла бик асык күрәбеҙ. Ҡәрҙәш алтай телдәре ғаиләһен тәшкил төрки, монгол һәм тунгус-манжур ҡәбиләләре, азия материгының төньяҡ өлөшөндә киң территорияла бик боронғо замандарҙағы сығанаҡ ҡәбиләнән таралып китеү арҡаһында, ул телдәр бер-береһенә аңлашылмаҫлык дәрәжәгә килеп үҙгәргәндәр. Шуға күрә төрки, монгол һәм тунгус-манжур телдәре бер-береһенә сағыштырмаса алыҫ ҡәрҙәш телдәр һанала. Ә инде төрки телдәренең күпселеге – үҙ-ара якын ҡәрҙәш телдәр. Ләкин төрки телдәренең үҙҙәренең араһында ҡәрҙәшлек дәрәжәһе төрлөсә. Мәҫәлән, сыуаш, якут, тува телдәре башҡа төрки телдәренең вәкилдәренә бөтөнләй аңлашылмай, ә төркмән, әзербайжан, хаҡас, ойрот телдәре аҙ аңлашыла (Кейекбаев Ж. Ғ.).*

V вариант

1. Бер һәм күп мәғәнәлек.
2. Башҡорт теленең терминологик һүҙлектәре.
3. *Һәр халыҡтың милли булмышын билдәләүсе төп һәм иң мөһим үҙенсәлектәренең береһе булып уның теле тороуы мәғлүм. Шуға ла һәр йәмғиәттең йәки дәүләттең тел өлкәһендәге сәйәсәткә ҙур иғтибар биреүе тәбиғиҙер. 1917 йылғы революциянан һуң башҡорт халҡы, үҙ республикаһын иғлан иткәс, башҡа күп проблемаларҙы хәл итеү менән бергә тел мәсьәләһенә лә етди иғтибар йүнәлтә. Был хәрәкәткә ғәмәлдә 1917 йылдың декабрендә уҙғарылған Ғөмүми Башҡортостан Ҡоролтайында ышаныслы нигеҙ һалынһа ла, 20-се йылдарҙа айырыуса киң ҡолас ала. Был эш ауыр ҙа, ҡатмарлы ла, яуаплы ла була, сөнки дөйөм халыҡ һөйләү теленә нигеҙләнгән әҙәби тел булдырыу, уның орфографияһын төҙөү, фонетик, грамматик һәм лексик нормаларын билдәләү кәрәк була (Рәжәпов Р.).*

VI вариант

1. Тура һәм күсмә мәғәнәлек. Күсмә мәғәнәлек төрҙәре. ..
2. Паронимдар һүҙлектәре.
3. *Туған тел һәр халыҡтың милли үҙенсәлектәренең иң мөһим сағылыштарының береһе булған кеүек, башҡорт теле лә – халҡыбыҙҙың күп быуатлыҡ тарихының айырылғыһыҙ юлдашы. Уларҙың тарихи яҙмышы уртаҡ. Боронғо замандарҙан үҙ телендә уҡыу-яҙыу булмаһа ла, башҡорттар ҙа телгә тоғролоҡто бер төптән булған шиғәләрҙә һаҡлап килә алған. Бүтән төрки халыҡтар һымаҡ уҡ, уҡып-яҙыуҙа уларҙы ғәрәп, фарсы, иҫке төрки (сығатай) телдәре берләштергән, йәғни башҡорттарға яҙма әҙәби тел булып хеҙмәт иткән. Шул уҡ ваҡытта беҙҙе бөтөн бер милләт итеп танытҡан “Урал батыр”, ”Аҡбуҙат” кеүек эпостарҙың, халыҡ ижады жанрҙарының үҙ милли теле-башҡорт теле булған. Ғәрәп, фарсы, иҫке төрки кеүек яҙма телдәрҙән айырмалы,ул-әҙәбит телдең һөйләү формаһы. Ошо күҙлектән фекер йөрөткәндә, ҡасандыр әҙәби тел ике: яҙма әҙәби тел һәм һөйләү теле формаһында йәшәгән. Тимәк, совет осорона – XX быуаттың егерменсе йылдарына ҡәҙәр башҡорттарҙың әҙәби теле булмаған, тигән фекерҙең ғилми ҡараш менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ (Нурғәлин З.)*

VII вариант

1. Башҡорт телендә төп башҡорт һүҙҙәре.
2. Башҡорт теленең академик һүҙлегендә диалекталь лексика.
3. *Һүҙ – телдең нигеҙ ташы, уның төп һәм универсаль берәмеге һанала. Башҡорт һүҙҙәре лә шулай. Һүҙҙең мөһимлегенә баҫым яһап, ғөмүмән телде лә йыш ҡына һүҙҙәр теле тип йөрөтөү бар. Ысынлап та, һүҙҙә, үҙенсәлекле тамға системаһы булараҡ, һәр бер телдең специфик яғы күренә. Шул һүҙҙә тел элементтары төйөнләнгән һәм ул үҙе юғарыраҡ берәмектәр өсөн «төҙөлөш материалы» булып та хеҙмәт итә. Шул уҡ һүҙҙә тел һәм фекерләүҙең, тел һәм ысынбарлыҡтың үҙ-ара бәйләнеше һәм мөнәсәбәттәшлеге күҙәтелә. Тап шул һүҙҙә төрлө телдәрҙең үҙ-ара оҡшашлығы һәм айырмалы яҡтары, һәр береһенең ҡабатланмаҫлығы, милли колориты асыҡ күҙгә ташлана (Ҡаһарманов F.F.).*

VIII вариант

1. Башҡорт телендә үҙләштерелгән һүҙҙәр.
2. Тәржемәүи һүҙлектәр.
3. *Бер телдән икенсе телгә тәржемә иткән саҡта, беҙ һүҙҙең мәғәнәһенә ике телдә лә оҡшаш эквивалент табабыҙ. Бер телдәге һүҙҙең мәғәнәһен икенсе бер телдә дөрөҫөрәк биреү өсөн, уның төрлө стилистик варианттары ҡулланыла. Һүҙ мәғәнәһен белдереүсе төрлө стилистик варианттар һөйләүсенең хәбәр итеү, коммуникатив ниәтенә, маҡсатына, уның психологик хәленә тығыҙ бәйләнгән. Беҙҙең тарафтан*

*көндәлек тормошта кулланылған һүҙҙәр башлыса күп мәғәнәле була, шунлыктан үҙ-ара хәбәрләшеү процесында был һүҙҙәр асыклауҙы, өҫтәмә аңлатма биреүҙе талап итә, тимәк, улар билдәле бер контекста алынырға тейеш. Бынан тыш һүҙҙәрҙең тура һәм күсерелгән мәғәнәләре була (Сәйетбатталов F.F.).*

IX вариант

1. Башҡорт телендә омонимия күренеше.
2. Башҡорт телендә орфографик һүҙлектәр.
3. *Тыуған яғына онотолмаҫ дан, еңеү яулап, киң күкрәген Ватандың иң дәрәжәле ордендары менән биҙәп, Алтын йондоҙ балҡытып ҡайтҡан был ҡаһарман егетте тәү башлап 1947 йылда күрҙем... Бына минең алдымда урта буйлы, яҡты, хатта бер ни тиклем оялсан ҡарашлы, аҙ һүҙле, үтә баҫалҡы хәрби кеше баҫып тора. Һорауҙарыма ябай һәм ҡыҫҡа-ҡыҫҡа итеп яуап бирә.*

*– Беҙҙең барлыҡ һалдаттар ҙа шулай батыр һуғышты, апай, – тип ҡуя тыйнаҡ ҡына. – Шулай булмаһа, беҙ еңә алыр инекме ни?!*

*Ә мин, ысынлап та, үҙем күрергә теләгән батырҙы, халҡыбыҙ әйткәнсә, имен саҡта башҡаларҙан бер нимәһе менән дә айырылмаған, тыйнаҡ, сабыр, баҫалҡы холоҡло, ә оло һынау сәғәтендә еңелмәҫ ҡаһарманға әйләнгән ир арыҫланын осратыуыма ҡыуанып, һорау артынан һорау бирәм (Бишева З.).*

X вариант

1. Ҡулланылышы сикләнгән лексика.
2. Башҡортса энциклопедик һүҙлектәр.
3. *Яҙма әҙәби тел барлыҡҡа килгәнсе үк әле, төрки телдә һөйләшкән бик боронғо ҡәүемдәр «тел ярышы» мәжлесе үткәрә торған булғандар. Әйтәйек, бер тәүҙуғ (тема) буйынса күптәр һөйләй. Телмәр матур ҙа, мәғәнәле лә, сәнғәтле лә булһын. Кешенең аң-аҡыл алтыны, хис-тойғо көмөшө, эске донъяһы, фекер йөрөтөү кеүәте, рухи йөҙө, йөрәк ялҡыны көсө, күңел шәфҡәтлелеге шунда асыҡлана. Әлбиттә, әҙәм балаһын ваҡыт-ваҡыт һандуғас итә торған моң да ҡатнаша. Тамырҙаш, ҡәрҙәш, фекерҙәш, арҡадаш булмаған телдәрҙә лә моң уртаҡлығы бар. Был хосусиәт күрше булып йәшәгән боронғо чиндар (хәҙерге ҡытайлылар) менән төрки телдә һөйләшкән һундарҙа күҙәтелә. Уларға корея халҡы моңо ла килеп ҡушыла. Бер ни ҡәҙәр япондыҡы ла (Поварисов С.)*

**“Фонетика, фонология, орфоэпия, графика, орфография” бүлектәре буйынса контроль эш һорауҙары**

I вариант

1. Башҡорт телендә һуҙынҡыларҙы менән тартынҡыларҙы айырыусы төп критерийҙар.
2. Башҡорт яҙыуының латин графикаһы осоро.
3. Редукция күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Сингармонизм законының ирен гармонияһы төрө.
5. Башҡорт орфографияһында ҙур һәм бәләкәй хәрефтәр ҡулланыу.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

II вариант

1. Ижек һәм уның башҡорт телендәге структураһы.
2. Башҡорт яҙыуының ғәрәп графикаһы осоро.

3. Элизия күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәр системаһы.
5. Башҡорт орфографияһында һүҙҙәрҙе ҡушып яҙыу ҡағиҙәләре.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

III вариант

1. Башҡорт телендә баҫым, уның үҙенсәлектәре.
2. Башҡорт яҙыуының кириллица графикаһы осоро.
3. Протеза, эпентеза күренештәрен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Башҡорт теленең тартынҡы өндәр системаһы.
5. Башҡорт орфографияһында һүҙҙәрҙе һыҙыҡса аша яҙыу ҡағиҙәләре.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

IV вариант

1. Башҡорт телендә телмәр мелодикаһы, уның элементтары.
2. Башҡорт теленең алфавиты.
3. Диссимиляция күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең әйтелеш үҙенсәлектәре.
5. Башҡорт орфографияһында аббревиатураларҙы яҙыу ҡағиҙәләре.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

V вариант

1. Башҡорт теленең орфоэпияһы.
2. Башҡорт яҙыуы тарихында руна яҙмаһы осоро.
3. Ыңғай ассимиляция күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Үҙләштерелгән һуҙынҡылар һәм тартынҡылар.
5. Башҡорт орфографияһында һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

VI вариант

1. Башҡорт теленең графикаһы.
2. Башҡорт яҙыуын кириллицаға күсереү буйынса тәүге ынтылыштар.
3. Метатеза күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Сингармонизм законының аңҡау гармонияһы төрө.
5. Орфографияның фонетик принцибы.

6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

VII вариант

1. Башҡорт телендә һуҙыҡыларҙың орфоэпияһы.
2. Башҡорт яҙыуында хәреф булмаған башҡа төрлө график саралар.
3. Яңғырауланыу күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Сингармонизм законының һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙың үҙ-ара ярашыуы төрө.
5. Орфографияның морфологик принцибы.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

VIII вариант

1. Башҡорт теленең орфографияһы.
2. Графиканың фонема принцибы.
3. Һаңғырауланыу күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Сингармоник параллелизмдар.
5. Орфографияның тарихи принцибы.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

IX вариант

1. Башҡорт телендә тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше.
2. Башҡорт яҙыуында ъ һәм ь хәрефтәренең функциялары.
3. Кире ассимиляция күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Гармонияһыҙ һүҙҙәр.
5. Орфографияның график принцибы.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.
7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.
8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

X вариант

1. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.
2. Башҡорт теленең специфик өндәре.
3. Үҙ-ара ассимиляция күренешен аңлатырға, миҫалдар килтерергә.
4. Башҡорт телендә сингармонизм законы.
5. Орфографияның дифференциаль приниципы.
6. Үҙегеҙ бәйләнешле текст һайлап алаһығыҙ. Ундағы 3 һүҙгә фонетик-график анализ яһарға.

7. Тексты орфоэпия күҙлегенән анализларға: үҙгәрештәрҙе күрһәтергә, сәбәптәрен аңлатырға.

8. Бер һөйләмде ғәрәп һәм латин графикаларында яҙырға.

**Морфология**

**1 вариант**

1. Һүҙ төркөмдәре. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәренең дөйөм билдәләре.
2. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.
3. Ҡылымдарҙың лексик-грамматик мәғәнәһе, морфологик категориялары һәм формалары, синтаксик функциялары.
4. Фараз итеү (ихтималлыҡ) һөйкәлеше.Уның төп грамматик мәғәнәһе.
5. Теркәүестәр. Уларҙың составы, төп башҡорт теленең теркәүестәре һәм үҙләштерелгән теркәүестәр.
6. Берлек һәм күплек формаларҙа эйәлек затының бөтә төр аффикстарын күрһәткән таблица төҙөргә.
7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Емеш бөтә сынаяҡ, сәйгүн, тәрилкә кеүек нәмәләрҙе тоҙ менән ышҡып, йылтыратып йыуып ултыртты(З.Биишева).*

**2 вариант**

1. Алмаш тураһында дөйөм төшөнсә бирегеҙ. Алмаш төркөмсәләре.
2. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Күплек аффикстарының варианттары.
3. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.
4. Теләк һөйкәлешенең мәғәнәһе, яһалышы, зат, һан һәм барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше.
5. Теҙеүсе теркәүестәр.
6. «Башҡортса-русса һүҙлек» (М., 1996) буйынса төҫтәрҙе белдергән һүҙҙәрҙе тәржемәһе менән күсереп алырға (10-15 һүҙ), ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауын билдәләргә, башҡорт эквивлентттары менән һөйләмдәр төҙөргә.
7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Иң аҙаҡтан иҙәнде, ек-йоғон ҡалдырмай, **һап-һары итеп, бысаҡ менән ҡырып йыуып сыҡты (З.Биишева).***

**3 вариант**

1. Һүҙ төркөмдәренә бүлеү принциптары.
2. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Түбәндәге һүҙҙәрҙе килештәр менән үҙгәртергә: *китап, тормош.*
3. Ҡылымдарҙың аналитик формалары.
4. Ниәт-маҡсат һөйкәлешенең мәғәнәһе, яһалышы. Уның формалары
5. Эйәртеүсе теркәүестәр
6. «Башҡорт халыҡ ижады» күп томлығының боронғо йырҙар тупланған китабынан күплек формаһында файҙаланылған яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе күсереп алығыҙ (10-ар миҫал), һәм уларға морфологик анализ яһағыҙ.
7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Өй артындағы бүрәнә өҫтөндә Айҙар менән Ғабдулла байтаҡтан бирле һүҙһеҙ ултыралар (М.Кәрим).*

**4 вариант**

1. Нумератив һүҙҙәр, уларҙың мәғәнә үҙенсәлектәре.
2. Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы. Түбәндәге һүҙҙәрҙе хәбәрлек ктегорияһы менән үҙгәртергә: *уҡыусы, осоусы.*
3. Ҡылымдарҙың грамматик категориялары.
4. Исем ҡылымдың мәғәнәһе, яһалышы.

5. Бәйләүестәрҙең мәғәнә мөнәсәбәттәре, яһалышы һәм синтаксик функциялары. Бәйләүестәрҙең төрлө килештәр менән башҡарылыуы.

6. Художестволы әҙәбиәтән берлек формаһындағы исемдәрҙең күплек мәғәнәһен белдереүенә миҫалдар (15-20) яҙып алырға.

7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Айҙар һеңлеһе Гөлнурҙы саҡырып алды ла Яҡупты алып килергә ҡушты (М.Кәрим).*

**5 вариант**

1. Исемдәрҙең эйәлек категорияһы. Түбәндәге һүҙҙәрҙе эйәлек категорияһы менән үҙгәртергә: *китап, дәфтәр.*

2. Һандарҙың стилистик үҙенсәлектәре.

3. Ҡылымдарҙың барлыҡ-юҡлыҡ категорияһы

4. Уртаҡ ҡылымдың төп мәғәнәһе, яһалышы, морфологик үҙенсәлектәре.

5. Саҡырыу һүҙҙәре.

6. Художестволы әҙәбиәттән төп һәм шартлы сифаттар (төп сифаттарҙың төрлө дәрәжәләрендә) булған һөйләмдәр (10-15) яҙып алырға, тикшерергә.

7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Ялан аяҡтары менән бысраҡты сәпелдәтә-сәпелдәтә, Гөлнур Яҡуптарға табан йүгерҙе (М.Кәрим).*

**6 вариант**

1. Сифат тураһында дөйөм төшөнсә: мәғәнәһе, һорауҙары, яһалышы. Төп һәм шартлы сифаттар.

2. Рәүештәрҙең семантик төркөмсәләре.

3. Ҡылымдың йүнәлеш категорияһы.

4. Сифат ҡылымдың мәғәнәһе, уның сифат һәм ҡылым билдәләре.

5. Киҫәксәләрҙең мәғәнә үҙенсәлектәре һәм төрҙәре.

6. Алмаштарҙың төркөмсәләрен сағылдырған схема йәки таблица төҙөргә.

7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Бөтә тирә-яҡта тынлыҡ, бөтә нәмә йоҡлай, ә йылға һаман аға ла аға (К. Мәргән).*

**7 вариант**

1. Исемдәрҙең лексик-семантик төркөмсәләре.

2.Ярҙамсы һүҙ төркөмдәретураһында төшөнсә.

3. Ҡылымдың күләм категорияһы.

4. Хәл ҡылымдың мәғәнәһе, уның рәүеш һәм ҡылым билдәләре.

5. Киҫәксәләрҙең семантик төркөмсәләре.

6. ««7» һанын ҡулланып, халыҡ ижадынан миҫалдар килтерегеҙ (йола, ырым, мәҡәл, әйтем).

7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Тик эреле-ваҡлы тулҡындар ғына шыбырҙашып һөйләшеп алалар, ләкин ул да оҙаҡҡа һуҙылмай (К. Мәргән).*

**8 вариант**

1. Сифат дәрәжәләре. Түбәндәге һүҙҙәрҙе дәрәжәләр менән үҙгәртегеҙ: *йәшел, тәмле, оло.*

2. Алмаштарҙың һан һәм килеш менән үҙгәреү үҙенсәлектәре.

3. Хәбәр һөйкәлеше.Уның төп грамматик мәғәнәһе. Хәбәр һөйкәлешенең заман формалары.

4. Ҡылым рәүешлеге. Уны белдереүсе формаларҙың мәғәнә биҙәктәре.

5. Модаль һүҙҙәрҙең мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре. Модаль һүҙҙәрҙе мәғәнәләре буйынса төркөмләү

6. «3» һаны менән бәйле әйтемдәр, хикмәтле һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, тормош күренештәрен яҙығыҙ.

7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Еткән ҡыҙлы кешеләр үҙҙәренең өмөт иткән яҡтарынан яусы әбейҙәрҙең килгәнен көтәләр (Н.Мусин).*

**9 вариант**

1. Сифаттарҙың стилистик үҙенсәлектәре.
2. Исем тураһында дөйөм төшөнсә: мәғәнәһе, һорауҙары, яһалышы. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр.
3. Бойороҡ һөйкәлеше.
4. Ҡылым формаларының эмоциональ-экспрессив мәғәнәләре
5. Ымлыҡтарҙың семантик һәм грамматик үҙенсәлектәре.
6. «Башҡорт теленең һүҙлегенән» «А» хәрефенә башланған 8 ҡылым яҙып алып, уларҙы ҡылым төркөмсәләре формаларына ҡуйып, һүҙбәйләнештәр төҙөп күсереп алығыҙ.
7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Яусы ебәргән уллы кешеләр яусыларының ниндәй сырай менән ҡайтыуҙарын аңдыйҙар (Н,Мусин).*

**10 вариант**

1. Һан тураһында дөйөм төшөнсә. Һан төркөмсәләре.
2. Рәүештәрҙең лексик-грамматик мәғәнәләре һәм синтаксик функциялары.
3. Шарт һөйкәлеше. Шарт һөйкәлешенең мәғәнәһе, уның формалары
4. Ҡылым формаларының стилистик функциялары
5. Оҡшатыу һүҙҙәренең яһалышы, мәғәнәүи үҙенсәлектәре.
6. Нәфис әҙәбиәттән төрлө мәғәнә сағылдырған бойороҡ һөйкәлештәре булған 10-15 һөйләм күсереп алығыҙ.
7. Һөйләмдәге бар һүҙҙәргә лә морфологик анализ яһағыҙ. *Ҡояш өҫтөнә ҡулыңды ҡуй ҙа ҡара, алыҫ-алыҫтарға һуҙылып киткән киң яландар ус төбөндә кеүек кенә булыр (Н,Мусин).*

**Синтаксис**

**1 вариант**

1. Һүҙбәйләнештәрҙе өйрәнеү тарихы, һүҙбәйләнештең төҙөлөшө һәм грамматик мәғәнәһе.
2. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.
3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Машиналарға ултырырға әмер булғас, Любомир, бөтә тирә яҡты ҡыҙырып, Мария Терезаны эҙләне (М.Кәрим)*

**2 вариант**

1. Эйәртеүле һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙең синтаксик бәйләнеш юлдары.
2. Бер составлы һөйләмдәр.
3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Алыҫта, көнбайышта, күгелйем төтөн ҡаплаған урман күренде (З.Хисмәтуллина).*

**3 вариант**

1. Эйәртеүсе һүҙҙең лексик-грамматик билдәләренә бәйле һүҙбәйләнеш төрҙәре.
2. Ҡатмарландырылған ябай һөйләмдәр тураһында төшөнсә.
3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Гөлйемеш, балан, мышар ағастары, йәй яҡынлашыуға шатланған һымаҡ, һаҡлыҡ менән генә ел ыңғайына сайҡалалар (Я. Хамматов).*

**4 вариант**

1.Интонация һәм уның һөйләмдәге роле.

2. Тиң киҫәктәр менән ҡатмарландырылған ябай һөйләмдәр.

3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Рәкия уға күп ваҡыт үҙенең элек һәм һуңғы ваҡытта кисергән тормоштарын һөйләй, ҡайһыһына шатлана (Ғ.Хәйри).*

**5 вариант**

1.Һөйләмдең коммуникатив төрҙәре.

2. Айырымланған эйәрсән киҫәктәр менән ҡатмарландырылған ябай һөйләмдәр.

3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Үлем менән көрәшеүсе һөйөклө кешеһе янында нисәмә төндәр йоҡоһоҙ үткәргән Мәғрифәгә лә, Садрисламға ла айырылышыу бик яманһыу булды (Ф.Иҫәнғолов).*

**6 вариант**

1. Раҫлау һәм инҡар итеү һөйләмдәре.

2. Өндәш һүҙҙәр менән ҡатмарландырылған ябай һөйләмдәр.

3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Беҙҙең эшебеҙ ҙә, өҫ-башыбыҙ ҙа, өйҙәребеҙ ҙә, урмандарыбыҙ ҙа – барыһы ла, барыһы ла матур булырға тейеш (Ә.Вәли).*

**7 вариант**

1.Ябай һөйләмдә һүҙ тәртибе, һүҙ тәртибенең функциялары.

2. Инеш һүҙҙәр һәм инеш һөйләмдәр менән ҡатмарландырылған ябай һөйләмдәр.

3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Ғ.Ибраһимовтың был китабын уҡығас, мин Талип Ғөбәйҙуллиндың тормошо менән ҡыҙыҡһына бшланым (С.Ҡудаш).*

**8 вариант**

1.Һөйләмдең актуаль бүленеше.

2. Индермә конструкциялар.

3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Миңлебай ҙа, йәш булһа ла, үҙ тормошоноң насарлығын белгәнлектән, әсәһенең эшкә ашмаған өгөтөнә бер ҙә күнгеһе килмәне (Т.Йәнәби).*

**9 вариант**

1.Структураһы буйынса һөйләм төрҙәре.

2. Башҡорт телендә парцелляция.

3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Ул ҡурҡыуҙан бигерәк, быҙауҙарҙы ҡыҙғаныуҙан, үкереп илап ебәрҙе һәм башын ергә эйҙе (Б.Бикбай).*

**10 вариант**

1. Һөйләмдең баш киҫәктәре.

2. Өҫтәлмә конструкцияларҙың төрҙәре.

3. Бирелгән һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, анализлағыҙ һәм һөйләмгә тулы синтаксик анализ яһағыҙ.

*Бынан һуң Юламан карттың һүнеп барған аңында Зөлхизәнең йыр тауышы, яр аҫтынан килгән кеүек, үҙәк өҙгөс моң менән һыҙыла башланы (З.Биишева).*

**Тестовые задания**

1. *“Егерме етенсе октябрь”* һүҙбәйләнеше цифрҙар менән нисек яҙыла
1. 27 – енсе октябрь
2. 27 – се октябрь
3.**27 октябрь**

2. Ҡайһы һүҙҙә ялғау дөрөҫ:
1. **Рулде**
2. Июньдә
3. Фестивальгә

3. Ялғауы дөрөҫ булмаған һүҙҙе билдәләгеҙ:
1. **Төҙөлөштең**
2. Ҡоростоң
3. Тороусы

**4. Ҡайһы юлда һүҙҙәргә ялғау дөрөҫ ҡушылған:**
**1. Лагерҙә, секретарҙе**
**2**. Лагерҙа, секретарҙы
**3. Лагерьҙа, секретарьҙы**

5. *Нисәнсе йылдан алып башҡорттар урыҫ графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитты ҡуллана башлай?*
1. XV быуаттан
**2. 1940 йылдан алып**
3. 1917 йылдан

6. *Тел ғилеменең ниндәй бүлеге телмәр өндәрен, уларҙың бүленешен, телмәрҙә үҙгәрешен өйрәнә?*
1. орфография
2. **фонетика**
3. морфология

7.*Башҡорт алфавитында нисә хәреф ике өндө белдерә?*
1. өс
2. ике
**3. дүрт**

8. *Ҡайһы рәттә һуҙынҡы өндәр генә бирелгән.*
1. а, о, у, ы, ө, э, я, ә, е
2. а, о, у, и, ы, я, ү, е, ө
3. **а, о, ә, ө, и, ү, э, у, ы**

9.*Ҡайһы рәттәге хәрефтәр икешәр өндө белдерә.*
1. а, ә, э, и, о, ө, у, ү ы
**2. е, ё, ю, я**
3. е, ю, я, ү, э

10.*Яңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ.*
1. п, ф, к, ҡ, т, ҫ, ш, х, һ, ч, ц, щ
2. **б, в, г, ғ, д, ҙ, ж, з, й, л, м, н, ң, р**
3. п, ф, к, ҡ, т, с, ҫ, ш, х, ч, ц, щ, б, в, г

11. *Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ.*
1. п, ф, к, ҡ, т, с, ҫ, ш, х, һ, ч, ц, щ
2. **б, в, г, ғ, д, ҙ, ж, з, й, л, м, н, ң, р**
3. п, ф, к, ҡ, т, с, ҫ, ш, д, б, в

12.*Хәреф һаны өн һаны менән тап килмәгән һүҙҙе күрһәтегеҙ.*
1. **Юлаев**
2. төнгө
3. дәрес
4. ауыл

13.*<u>Китап</u> һүҙендә нисә һаңғырау, нисә яңғырау тартынҡы бар?*
1. **Бөтәһе лә һаңғырау тартынҡы**
2. Ике һаңғырау, бер яңғырау тартынҡы
3. Бер һаңғырау, ике яңғырау тартынҡы

14.*Бал (1) - бил(2),ҡараҡ(3)- көрәк (4) һүҙҙәренең ҡайһыларында ҡалын, ҡайһыларында нәҙек һуҙынҡылар ҡулланылған?*
1. Бөтә һүҙҙәрҙә лә ҡалын һуҙынҡылар
2. Бөтә һүҙҙәрҙә лә нәҙек һуҙынҡылар
4.**1, 3 һүҙҙәрҙә ҡалын, 2, 4 һүҙҙәрҙә нәҙек һуҙынҡылар**

15. *Яҡын, юлаҡ һүҙҙәрендә дүртәр хәреф, ә нисәшәр өн бар?*
1. өсәр өн
2. дүртәр өн
**3. бишәр өн**

16.*<u>Еңел-елпе</u>һүҙендә нисә хәреф, нисә өн бар?*
1. 8 хәреф, 8 өн
2. **8 хәреф, 10 өн**
3. 8 хәреф, 9 өн

17.*<u>Ҡарлуғас</u>һүҙендә тартынҡы өндәр ҡайһылары?*
1. 1, 3, 4, 6, 7-се өндәр
2. 1, 2, 5, 7-се өндәр
**3. 1, 3, 4, 6, 8-се өндәр**

18. *Һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ.*
**1.әсәй**
2. тормош
3. яҙыусы

19. *Һуҙынҡы өндән башланмаған һүҙҙе күрһәтегеҙ.*
1. үлән
**2. елән**
3. уҡыусы

20. *Тартынҡыөндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ.*
**1. еләк**
2. урман
3. үлән

**Лексика. Лексикология.**

**1**. Ысынбарлыҡ тураһындағы төшөнсәнең һүҙҙә бирелеүе, һүҙ ярҙамында сағылдырылыуы...
1. грамматик мәғәнә...
**2. лексик мәғәнә...**
3. модаллек тип атала

**2.** Телдә полисемия күренеше нимә менән бәйләнгән?
1. һүҙҙәрҙең бермәғәнәлелеге менән
2. һүҙҙәрҙең һөйләмдәге үҙ-ара мөнәсәбәте менән
3. һүҙҙәрҙең грамматик категориялары менән
**4. һүҙҙәрҙең күпмәғәнәлелеге менән**

**3.**Лексикологияның тикшеренеү объекты булып ниндәй берәмек һанала?
1. текст
2. һөйләм
3. һүҙбәйләнеш
**4. һүҙ**

4. Семасиология …
**1. һүҙҙең мәғәнәһен**...
2. һүҙлектәрҙе...
3. стиль мәсьәләләрен өйрәнә

**5.**Полисемияның төрҙәренә түбәндәгеләр ҡарай:
1. синоним, омоним, антоним
2. ономастика, топонимика
**3. метафора, метонимия, синекдоха**
4. фразеология, лексикография

**6.** Ниндәй һүҙҙәр антонимдар тип атала?
**1.мәғәнәләре яғынан ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр**
2. мәғәнәләре менән бер төрлө, әйтелештәре бер үк
3. төрлө әйтелешле, мәғәнәләре буйынса яҡын һүҙҙәр

**7.** Омонимдарға ниндәй һүҙҙәр ҡарай?
1. мәғәнәләре яғынан ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр
**2. мәғәнәләре менән төрлө, әйтелештәре бер үк**
3. төрлө әйтелешле, мәғәнәләре буйынса яҡын һүҙҙәр

**8.** Синонимдар тип ниндәй һүҙҙәргә әйтәләр?
1. мәғәнәләре яғынан ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр
2. мәғәнәләре менән төрлө, әйтелештәре бер үк
**3. төрлө әйтелешле, мәғәнәләре буйынса яҡын һүҙҙәр**

**9.** Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһы ниндәй төркөмдәргә бүленә?
1. актив һәм пассив ҡатламдар
**2. башкорт һүҙҙәре, үҙләштерелгән һүҙҙәр**
3. битараф һәм фәнни лексика

**10.** Диалектизмдарға ниндәй лексик берәмектәр инә?

1. тотороҡло һүҙбәйләнештәр
2. айырым һөнәр өлкәһендә ҡулланылған һүҙҙәр
**3. айырым бер территория, ерле һөйләштәр өсөн хас һүҙҙәр**

**11.** Фразеологияның өйрәнеү объекты булып...
1. ирекле һүҙбәйләнештәр
2. төрлө фразалар
**3. тотороҡло һүҙбәйләнештәр сығыш яһай**
**12.** Лексикография фәне нимә менән шөғөлләнә?
1. һүҙҙәрҙең килеп сығышын тикшерә
2. һүҙҙәрҙең мәғәнәүи үҙенсәлектәрен билдәләй
**3. һүҙлектәр төҙөү мәсьәләләрен хәл итә**

**13.** Стилистика фәне ниндәй тармаҡтарға бүленә?
1. архаизмдар, неологизмдар
**2. функциональ һәм грамматик стилистика**
3. грамматик һәм лексик мәғәнәләр

**14. "**Лексикология" фәне нимә өйрәнә?
**1. айырым телдең һүҙлек составын өйрәнә**
2. һүҙҙәрҙең ҡулланылыу үҙенсәлектәрен тикшерә
3. һүҙлектәр төҙөү мәсьәләләре менән шөғөлләнә

**15.** Лексикологияның ниндәй бүлеге һүҙҙәрҙең килеп сығышын тикшерә?
1. ономасиология
2. семасиология
**3. этимология**

**16.**"Ономасиология" тел берәмектәрен ниндәй үҙенсәлектәре буйынса өйрәнә?
1. семантик үҙенсәлектәре яғынан
2. ҡулланылыш үҙенсәлектәре буйынса
**3. исемләү, атама биреү үҙенсәлектәре буйынса**

**17.** Омонимдарҙы күрһәтегеҙ.
**1. ат – ат, ял – ял, үпкә – үпкә**
2. матур, сибәр, гүзәл, һылыу
3. бейек – тәпәш, шәп – яй

**18.** Антонимдарҙы билдәләгеҙ.
1. ауырыу – сирләү, артыу – ишәйеү
2. йыуаныс – ҡыуаныс, һауын – һауым
**3. ҡуйы – шыйыҡ, ҡыҫҡа – оҙон**

**19.** Синонимдарҙы күрһәтегеҙ.
1. ябыу – асыу, сығыу – инеү
**2. ауыр – һәлмәк, ауырыу – сирләү**
3. бит – бит, май – май

**20.** Кеше исемдәрен, фамилияларын өйрәнеүсе фән...
1. топонимика…
2. этнонимика…
**3. антропонимика тип атала**

**21.** Фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
**1. гөл, гөнаһ, дошман**
2. йома, китап, ғүмер
3. ҡолаҡ, эш, самауыр

**22.** Ғәрәп һүҙҙәрен күрһәтегеҙ.
1. ағас, баш, көмөш
**2. ғалим, рәсем, рамаҙан**
3. тамаша, фил, таҫтамал

**23.** Урыҫ теленән ингән һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ.
**1. ҡамыт, сәй, эшләпә**
2. батша, йыһан, йән
3. дәрәжә, вәкил, нур

**24.** Урыҫ теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
1. сәс, йылға, тау
**2. авангард, демократия, психика**
3. мәғариф, милләт, алла

**25.** Түбәндәге һүҙҙәрҙән фразеологизмдарҙы күрһәтегеҙ.
1. алып килеү, һөйләй башлау, ҡарап алыу
**2. баш һалыу, таң ҡалыу, түбә күккә тейеү**
3. күк күлдәк, йылы ҡыш, өйгә инеү

**26.** Иҫкергән һүҙҙәрҙе айырып күрһәтегеҙ.
1. телефон, йылға, тау
2. һалдат, дуҫ, белем
**3. төмән, ярлыҡ, алпауыт**

**27.** Ниндәй һүҙҙәргә тарихи һүҙҙәр тип әйтәләр?
**1. ҡулланылыштан төшөп ҡалған предметтарҙы атаған һүҙҙәр**
2. яңы барлыҡҡа килгән предметтарҙы атаған һүҙҙәр
3. хәҙерге предметтарҙың иҫкергән атамалары

**28.** Ниндәй һүҙҙәр архаизмдарға инә?
1. тормошҡа һуңғы осорҙа килеп ингән предметтарҙың атамалары
**2. төрлө күренеш, предметтарҙың иҫкергән атамалары**
3. хәҙерге көндә булмаған күренештәрҙең атамалары

**29.** Неологизмдар тип ниндәй һүҙҙәргә әйтәләр?
**1. яңы барлыҡҡа килгән һүҙҙәргә**
2. хәҙерге көндә актив ҡулланылған һүҙҙәргә
3. хәҙерге көндә ҡулланылмаған һүҙҙәргә

**30.** Түбәндәгеләрҙән тарихи һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ.
**1. ҡыҙыл гвардеец, ҡарымта, тархан**
2. тыу, шура, хөрриәт
3. көн, үлән, бала

**31.** Архаизмдарҙы күрһәтегеҙ.

1. солтан, елән, хәлфә
**2. инҡилап, имлә, мөғәллимә**
3. баһа, таш, он

**32.** Неологизмдарҙы билдәләгеҙ.
1. аршин, батша, сулпы
2. ер, өй, мал
**3. синтезатор, слайд, биржа**
**33.** Ниндәй һүҙҙәр диалект лексикаһын тәшкил итәләр?
**1. ерле һөйләштәрҙә генә ҡулланылған һүҙҙәр**
2. айырым территория, профессия менән бәйләнмәгән һүҙҙәр
3. һөнәр-кәсеп менән бәйләнгән һүҙҙәр

**34.** Махсус лексикаға ниндәй һүҙҙәр инә?
1. айырым территорияла ҡулланылған һүҙҙәр
**2. билдәле бер профессия кешеләре тарафынан ҡулланылған һүҙҙәр**
3. дөйөм халыҡ тарафынан ҡулланылған һүҙҙәр

**35.** Дөйөм халыҡ теле лексикаһына түбәндәге һүҙҙәр инә:
**1. бөтә башҡорттар ҡулланған, аңлаған һүҙҙәр**
2. диалекттарҙа ғына ҡулланылған һүҙҙәр
3. айырым фәнгә ҡараған һүҙҙәр

**36.** Нимә ул терминдар?
1. төрлө мәғәнәле һүҙҙәр
**2. айырым тармаҡта ҡулланылған, бер мәғәнәле һүҙҙәр**
3. бөтә халыҡ тарафынан ҡулланылған һүҙҙәр

**37.** Жаргонизмдарға ниндәй һүҙҙәр инә?
1. ерле һөйләштәрҙә генә ҡулланылған һүҙҙәр
2. айырым профессия өлкәһендә ҡулланылған һүҙҙәр
**3. бер социаль төркөм тарафынан ҡулланылған һүҙҙәр**

**38.** Варваризмдарға ниндәй һүҙҙәр инә?
**1. дөйөм тел үҙләштермәгән сит тел һүҙҙәре**
2. хәҙерге ваҡытта юҡҡа сыҡҡан предметтарҙың атамалары
3. яңы барлыҡҡа килгән, киң таралмаған һүҙҙәр

**39.** Диалектизмдарҙы айырып күрһәтегеҙ.
1. дифтонг, грипп, эйә
**2. çарыҡ, боронҡо, һалйа**
3. ут, һөт, итек

**40.** Профессионализмдарҙы күрһәтегеҙ.
**1. умарта, балауыҙ, битлек**
2. йондоҙ, йәй, ҡағыҙ
3. диңгеҙ, кәмә, балыҡ

**41.** Терминдарҙы айырып күрһәтегеҙ.
1. ҡағыҙ, ағас, тупраҡ
2. аш, ҡаҙна, гөлйемеш
**3. алфавит, редукция, морфология**

**42.** Жаргонизмдарҙы билдәләгеҙ.
1. кран, конвейер, өсмөйөш
2. ҡатыҡ, май, икмәк
**3. автомат, бомба, зачетка**

**43.** Варваризмдарҙы күрһәтегеҙ.
1. дилбәгә, коридор, сауҙа
**2. вис, сәпсим, түлке**
3. характер, ярыш, быуын

**44.** Ниндәй һүҙҙәр паронимдар тип атала?
1. ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр
2. әйтелештәре һәм яҙылыштары төрлө, мәғәнәләре яҡын һүҙҙәр
**3. тышҡы төҙөлөшө буйынса оҡшаш, мәғәнәләре яғынан төрлө һүҙҙәр**

**45.** Паронимдарҙы билдәләгеҙ.
**1. тәгәрләү – тәгәрәү, урләү – урмәләү, бөрсөк – бөртөк**
2. ошо – теге, ҡайғы – шатлыҡ, быйыл – былтыр
3. аңлау – төшөнөү, матур – сибәр, аҫыл – затлы

**46.** Тәржемә һүҙлектәрендә ниндәй маҡсат ҡуйыла?
**1. бер телдең һүҙҙәрен икенсе тел һүҙҙәре менән биреү**
2. ер-һыу, кеше исемдәрен сағылдырыу
3. һүҙҙәргә аңлатма биреү

**47.** Орфография һүҙлектәрендә ниндәй мәсьәлә хәл ителә?
1. ерле һөйләштәрҙең һүҙ байлығы сағылдырыла
2. һүҙҙәрҙең килеп сығышы күрһәтелә
**3. һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы бирелә**

**48.** Ономастик һүҙлектәрҙә нимә сағылдырыла?
**1. кеше исемдәре, географик атамалар бирелә**
2. яңғырашы оҡшаш, мәғәнәләре башҡа булған һүҙҙәр бирелә
3. айырым яҙыусының һүҙ байлығы күрһәтелә

**49.** Аңлатмалы һүҙлектәрҙә ниндәй маҡсат ҡуйыла?
1. һүҙҙәрҙең килеп сығышын күрһәтеү
2. мәғәнәләре бер булған һүҙҙәрҙе сағылдырыу
**3. бөтә һүҙҙәргә аңлатма биреү**

**50.** Орфоэпик һүҙлектәрҙә нимәгә иғтибар бирелә?
1. һүҙҙәрҙең яһалыу үҙенсәлектәренә
2. һүҙҙәрҙең төрлө текста ҡабатланыуына
**3. һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешенә**

**51.** “Стилистика” фәне ниндәй тармаҡтарға бүленә?
**1. лингвистик сттилистика һәм функциональ стилистика**
2. грамматик стилистика һәм рәсми стиль
3. публицистик стиль һәм йәнле һөйләү стиле

**52.** *Рәсәй Федерацияһы закондарында ҡаралған осраҡтарҙан тыш, граждандың паспортын тартып алыу тыйыла.* Был һөйләм ниндәй стилгә ҡарай?
1. йәнле һөйләү стиленә
2. публицистик стилгә
**3. рәсми стилгә**

**53.** *Аргумент, гипербола, агглютинация* һүҙҙәре ниндәй стилгә ҡарай?
1. художестволы стиль
2. публицистик стиль
**3. фәнни стиль**

**54.** *Ҡолаҡ ҡағыу, лығырлау, һыпыртыу, сәлдереү* һүҙҙәре ниндәй стилгә ҡарай?
**1. йәнле һөйләү стиленә**
2. рәсми стилгә
3. публицистик стилгә

**55.** *Әлбиттә, ҡала башҡорттары ҡоролтайының эшмәкәрлеге киң.* Был һөйләм ниндәй стилгә ҡарай?
1. художестволы стиль
**2. публицистик стиль**
3. йәнле һөйләү стиле

**56.** Миҫалдарҙан ирекле һүҙбәйләнештәрҙе айырып күрһәтегеҙ.
1. ерек тәртә, ғүмер кисереү, аҡыл инеү
**2. биҙәкле күлдәк, еңел йөк, тарихи ваҡиға**
3. ерле һөйләш, ҡуш ҡуллап, баш түбән

**57.** Нимә ул әҙәби тел?
1. бөтә башҡорттар һөйләшкән тел
2. айырым лингвистик үҙенсәлектәргә эйә булған халыҡ һөйләштәре
**3. нормалаштырылған, нормаға һалынған тел**

**58.** Башҡорт теле генеологияһы буйынса ниндәй төркөмгә ҡарай?
1. славян телдәре төркөмөнә
2. фин-уғыр телдәре төркөмөнә
**3. төрки телдәре төркөмөнә**

**59.** Телдәрҙең ҡәрҙәшлеге нисек билдәләнә?
1. уларҙың территориаль яҡынлыҡтары аша...
2. өн оҡшашлыҡтары буйынса...
**3. тамыр һүҙҙәрҙә дөйөмлөлөк менән**...

**60.** Географик атамаларҙы ниндәй фән өйрәнә?
1. этнонимика
**2. топонимика**
3. зоонимика

**61.** Хайуан исемдәрен, ҡушаматтарын тел ғилеменең ниндәй бүлеге өйрәнә?
1. космонимика
2. антропонимика
**3. зоонимика**

**62.** “Этнонимика” бүлеге ниндәй күренештәрҙе өйрәнә?
1. күк есемдәренең атамаларын
**2. халыҡ, ырыу, ҡәбилә исемдәрен**
3. кеше ҡушаматтарын

**63. “**Космонимика” бүлегендә нимәләр ҡарала?
1. ер-һыу атамалары
2. үҫемлек атамалары
**3. күк есеме атамалары**
**64.** *Сәрлетамаҡ, Торатау, Ағиҙел* һүҙҙәре ниндәй атамаларға ҡарай?
1. антропонимдарға
2. этнонимдарға
**3. топонимдарға**

**65.** *Үҫәргән, ҡыпсаҡтар, әйләр* ниндәй атамаларҙы тәшкил итәләр?
**1. этнонимдарҙы**
2. зоонимдарҙы
3. космонимдарҙы

**66.** *Ҡош юлы, Сулпан йондоҙо, Етегән йондоҙ* ниндәй атамаларға инә?
1. фитонимдарға
2. зоонимдарға
**3. космонимдарға**

**67.** *Аҡтырнаҡ, айыу, төлкө* һүҙҙәре ниндәй исемдәргә ҡарай?
**1. зоонимдарға**
2. фитонимдарға
3. топонимдарға

**68.**Ҡайһы терминдар “Лексикология” бүлегенә ҡарамай?
**1. синтаксис, килеш категорияһы, һан**
2. полисемия, синонимия, семасиология
3. этимология, антонимия, омонимия

**69.** *Фәнил, Раиф, Фатих* һүҙҙәре ниндәй бүлеккә ҡарай?
1. морфология
2. этнонимика
**3. антропонимика**

**70.**Ниндәй берәмектәр фразеологизмдарға инмәй?
1. ваз кисеү, соҡор елкә, ҡойроҡ болғау
**2. оло һүҙен бүлдермә, тел – күңелдең көҙгөһө**
3. аҡылдан яҙыу, һай йөҙөү, ағас тел

**71.** Ниндәй һүҙҙәр экспрессив-эмоциональ, баһалау мәғәнәләренә эйә?
**1. һылыуҡай, ҡолонсаҡ, һаҡал-маҡал**
2. тау, бәләкәй, яҡшы
3. ҡайтыу, йүгереү, үрмәләү

## Морфология

1. Морфология фәне нимәләрҙе өйрәнә?
   А. Телмәр өндәрен.
   Б. Һөйләм төрҙәрен.
   В. **Һүҙ төркөмдәрен.**

2. Һүҙ төркөмдәрен билдәләү принциптары:
   А. **Һүҙҙең мәғәнәһе, яһалышы, морфологик үҙгәреше, синтаксик функцияһы.**
   Б. Һүҙҙең мәғәнәһе, яһалышы, морфологик үҙгәреше.
   В. Һүҙҙең мәғәнәһе, морфологик үҙгәреше, синтаксик функцияһы.
3. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре:
   А. Исем, исем ҡылым, сифат, һан, ҡылым.
   Б. **Исем, сифат, һан, алмаш, ҡылым, рәүеш.**
   В. Исем, сифат, сифат ҡылым, һан, алмаш, рәүеш.

4. Хис-тойғоно белдереүсе һүҙ төркөмдәре:
   А. Исем, исем ҡылым, сифат, сифат ҡылым, рәүеш, рәүеш (хәл) ҡылым.
   Б. **Модаль һүҙҙәр, ымлыҡ, саҡырыу һүҙҙәре, оҡшатыу һүҙҙәре.**
   В. Инфинитив, исем ҡылым, сифат ҡылым.

5. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре:
   А. Модаль һүҙҙәр, ымлыҡтар, оҡшатыу һүҙҙәре.
   Б. **Бәйләүес, теркәүес, киҫәксә.**
   В. Исем ҡылым, сифат ҡылым, рәүеш (хәл) ҡылым, инфинитив.

6. Башҡорт телендә исемдәрҙең енес (род) категорияһы бармы?
   А. Бар.
   Б. **Юҡ.**
   В. Биологик енесте белдергән исемдәр бар.

7. Исемдәр ниндәй морфологик категориялар менән үҙгәрә?
   А. **Һан, эйәлек, хәбәрлек, килеш категориялары.**
   Б. Һан, эйәлек, дәрәжә, килеш категориялары.
   В. Һан, эйәлек, килеш, заман категориялары.

8. Исемдәрҙә һан категорияһы нисек белдерелә?
   А. **Аффикстар һәм *күп, байтаҡ* кеүек һүҙҙәр аша.**
   Б. *Байтаҡ, күп, аҙ* кеүек һүҙҙәр ярҙамында.
   В. Һүҙ баҫымы үҙгәреү арҡаһында.

9. Исемдәрҙең эйәлек категорияһы нисек белдерелә?
   А. **Аффикстар аша.**
   Б. Һорау алмаштары ярҙамында.
   В. *Был, теге, ошо* алмаштары менән.

10. Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы нисек белдерелә?
   А. **Аффикстар аша.**
   Б. Күрһәтеү алмаштары менән.
   В. *Ит* ҡылымы ҡушылып.

11. Исемдәр нисә килеш формаһында тора ала?
   А. 6.
   Б. 9.

В. **14.**

12. Ҡайһы төркөмдә тик тамыр исемдәр бирелгән?
   А. Баҡса, эш, бүлмә, утын.
   Б. **Ер, һыу, һауа, тау.**
   В. Елән, күлдәк, бүрек.

13. Ҡайһы төркөмдә (ябай) яһалма исемдәр бирелгән?
   А. Ел, күл, ат.
   Б. Ҡарағас, аҡҡош, ҡыҙылғанат.
   В. **Аскыс, сүкеш, быҫҡы.**

14. Ҡайһы төркөмдә берекмә ҡушма исемдәр бирелгән?
   А. Ер еләге, таш күмер, уҡыу йорто.
   Б. **Аръяҡ, бирьяҡ, терегөмөш.**
   В. Тау башы, таусы, ҡорос ҡойоусы.

15. Ҡайһы төркөмдә теркәлмә ҡушма исемдәр бирелгән?
   А. Көньяҡ, төньяҡ, алъяпҡыс.
   Б. **Ер еләге, ҡурай еләге, мүк еләге.**
   В. Ташсы, аусы, юлсы.

16. Ҡайһы төркөмдә парлы исемдәр бирелгән?
   А. **Ата-әсә, уй-фекер, дуҫ-иш.**
   Б. Ағас-мағас, тәм-том, әбей-һәбей.
   В. Драмтүңәрәк, педколледж.

17. Ҡайһы төркөмдә ҡабатлаулы исемдәр бирелгән?
   А. **Тимер-томор, әбей-һәбей, ағас-мағас.**
   Б. Тимерлек, нефтсе, педколледж.
   В. СДПА, БМО, медколледж.

18. Ҡайһы төркөмдә ҡыҫҡартылған ҡушма исемдәр бирелгән?
   А. Таш-маш, тау-таш, ер-һыу.
   Б. **БДУ, педакадемия, телеүҙәк.**
   В. "Башҡортостан уҡытыусыһы", роман-эпопея.

19. Ҡайһы төркөмдә ҡыҫҡартма исемдәр дөрөҫ яһалған?
   А. **Журнал – ж., гәзит – г., урам – ур.**
   Б. Журнал – жу., гәзит – гә., урам – ура.
   В. Район – р., йылға – йыл., ауыл – ау.

20. Ҡайһы төркөмдә күсмә исемдәр бирелә?
   А. Юлсы, тимер юл, тирә-яҡ.
   Б. Сәйхана, балхур, бәдбәхет.
   В. **Уҡыу, киләсәк, көтөүсе.**

21. Ҡайһы төркөмдәге исемдәр лексик-семантик юл менән яһалған?
   А. Ай (ҡалҡты), (таҡыр) юл, (йорт) эйәһе.
   Б. Ел-ямғыр, көньяҡ, йырсы.
   В. **(Март) айы, (мәсьәләне сисеү) юлы, (һөйләмдең) эйәһе.**

22. Фонологик юл менән яһалған исемдәр ҡайһы төркөмдә?
А. **Серек – сөрөк, суҡыш – сүкеш, күр – күҙ.**
Б. Таш – ташсы, аҡ – ағым, быс – бысҡы.
В. Ел-дауыл, ер-һыу, ата-әсә.

23. Аффикслашыу ысулы менән яһалған исемдәрҙе билдәләгеҙ.
А. Ағалтын, ағай-эне, райүҙәк.
Б. **Ураҡ, балыҡсы, сәскес, бүлмә.**
В. Аҡҡош, әбей-һәбей, ир-егет.

24. Нигеҙҙәр ҡушылыу ысулы менән яһалған һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
А. Кейем-һалым, ут-һыу, дуҫ-иш.
Б. Ҡорал-фәлән, бүре-маҙар, ғөрөф-ғәҙәт.
В. **Һабанай, урағай, буранай.**

25. Нигеҙҙәр ишләшеү ысулы менән яһалған исемдәрҙе әйтегеҙ.
А. Өсмөйөш, үҙаң, көнсығыш.
Б. **Хис-тойғо, уй-фекер, дуҫ-иш.**
В. Бала саҡ, баш ҡала, ҡушма һөйләм.

26. Нигеҙҙәр ҡабатланыу ысулы менән яһалған исемдәрҙе күрһәтегеҙ.
А. Кеше-маҙар, моң-зар, уй-фекер.
Б. Күпмөйөш, көнбайыш, ҡарағас.
В. **Ағас-мағас, малай-шалай, тимер-томор.**

27. Ҡыҫҡартылған ҡушма исемдәрҙе билдәләгеҙ.
А. Дәрт-дарман, көс-хәл, ағай-эне.
Б. Дүртмөйөш, өстаған, өсьяҡ.
В. **Мотобысҡы, телеүҙәк, драмтүңәрәк.**

28. Лексик-грамматик юл менән яһалған күсмә исемдәрҙе күрһәтегеҙ.
А. Аусы, һунарсы, ташсы.
Б. Көньяҡ, көнбағыш, көнсығыш.
В. **Белдереү (эленгән), (бәхетле) киләсәк, (ил) батыры.**

29. Күсмә исемдәрҙе билдәләгеҙ, яһалыу юлын әйтегеҙ.
А. СДПА, БДУ, МДУ.
Б. Эшсе, таусы, юлсы.
В. **Уҡытыусы, яҙыусы, көтөүсе.**

30. Һүҙбәйләнештәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә яһалған исемдәрҙе билдәләгеҙ.
А. Еләклек, ҡайынлыҡ, ҡурайсы.
Б. **Ер еләге, ҡайын еләге, ҡурай еләге.**
В. Ер-һыу, еләк-емеш, кәртә-ҡура.

31. Һөйләмдәрҙең лексемалашыуы менән яһалған исемдәрҙе әйтегеҙ.
А. Дәүләтселек, юлаусы, юлсы.
Б. **Дәүләткилде, Юлғотло, Хоҙайбирҙе.**
В. Яугир, хеҙмәткәр, Йыһангир.

32. Сифаттарҙың лексик-семантик төрҙәре:
А. Төп, тамыр, шартлы сифаттар.
Б. Тамыр, яһалма, шартлы сифаттар.

В. **Төп, шартлы, эйәлек сифаттары.**

33. Төп сифаттар төркөмөн билдәләгеҙ.
   А. **Йылы (көн), аҡ (сәскә), егәрле (эшсе).**
   Б. Өскөл (хаттар), дүрткел (майҙан).
   В. Айлыҡ (курстар), аҙналыҡ (эш), йыллыҡ (план).

34. Шартлы сифаттар төркөмөн билдәләгеҙ.
   А. Киң (урам), тар (урын), бейек (ҡойма).
   Б. Ҡурҡаҡ (ҡош), өркәк (мал).
   В. **Йәйге (кис), төнгө (юл), урмандағы (өй).**

35. Эйәлек сифаттары төркөмөн билдәләгеҙ.
   А. Ғилми (эш), тарихи (ваҡиға), ғәҙәти (хәл).
   Б. **(Бүрек) атайҙыҡы, (шәл) әсәйҙеке, (тәгәрмәс) арбаныҡы.**

36. Сифаттарҙың морфологик категориялары:
   А. Барлыҡ-юҡлыҡ, дәрәжә категориялары.
   Б. Дәрәжә, заман категориялары.
   В. **Һан, эйәлек, хәбәрлек, килеш, дәрәжә категориялары.**

37. Дәрәжә категорияһы менән үҙгәрә алыусы сифаттар төркөмөн күрһәтегеҙ.
   А. Ауылдағы (туғандар), яландағы (бесәнлек).
   Б. Әҙәби (түңәрәк), тарихи (роман), дини (йола).
   В. **Аҡыллы (бала), күңелле (концерт), йылы (бүлмә), илаҡ (бала).**

38. Яһалыштары буйынса сифаттарҙың төрҙәре.
   А. Төп, шартлы, эйәлек сифаттары.
   Б. **Тамыр, ябай яһалма, ҡушма, парлы, ҡабатлаулы, күсмә сифаттар.**
   В. Берлектәге, күплектәге сифаттар.

39. Лексик-семантик юл менән яһалған сифаттарҙы әйтегеҙ.
   А. Моңһоҙ (көй), оло (кеше), тиҫкәре (яҡ).
   Б. Ташҡын (йылға), тайғаҡ (юл), бейек (тау).
   В. **Моңһоҙ (кеше), оло (хәбәр), тиҫкәре (бала).**

40. Фонологик юл менән яһалған сифаттарҙы әйтегеҙ.
   А. Бейек (йорт), һалмаҡ (аҙым), һаҡ (ҡолаҡ).
   Б. Һалҡын (һыу), оҙон (юл), арғы (яҡ).
   В. **Бөйөк (шәхес), һәлмәк (әйбер), һау (кеше).**

41. Аффикслашыу юлы менән яһалған ябай яһалма сифаттарҙы билдәләгеҙ.
   А. Ҡуйы (урман), таҙа (урам), саф (һауа).
   Б. Континент-ара (маршрут), ҡала-ара (бәйләнеш).
   В. **Ҡышҡы (юл), отҡор (бала), ҡунаҡсыл (халыҡ).**

42. Нигеҙҙәр ҡушылыу юлы менән яһалған ҡушма сифаттарҙы әйтегеҙ.
   А. Ҡараңғы (төн), ҡаҙылма (минерал), йөрөмтәл (кеше).
   Б. Ҡыйбатлы (тауар), үҙенсәлекле (ижад).
   В. **Ҡарағусҡыл (төҫ), атҡаҙанған (уҡытыусы), үҙйөрөшлө (комбайн).**

43. Нигеҙҙәр ишләшеү юлы менән яһалған парлы сифаттарҙы билдәләгеҙ.

А. Үҙешмәкәр (түңәрәк), аръяҡтағы (туғай), бирьяҡтағы (күл).
Б. Алдынғы (бригада), ярҙамсы (кеше), оялсан (бала).
В. **Лексик-семантик (үҙенсәлек), сит-ят (кешеләр), халыҡ-ара (хәл).**

44. Нигеҙҙәр ҡабатланыу юлы менән яһалған ҡабатлаулы сифаттарҙы билдәләгеҙ.
А. Аллы-гөллө (сәскәләр), кәкре-бөкрө (ағас), асыҡ-тишек (ҡойма).
Б. Үҙһүҙле (бала), эскерле (кеше), ағыулы (йылан).
В. **Буй-буй (ыҙан), кат-ҡат (ҡатлама), тәмле-томло (ашамлыҡ).**

45. Лексик-грамматик юл менән яһалған күсмә сифаттарҙы күрһәтегеҙ.
А. Ҡарҙың иреүе, мунсаның ҡыҙыуы шәп, ағас артына йәшерен.
Б. Аҡ (ҡар), уңышлы (эш), әҙәби (ойошма), былтырғы (бесән).
В.**Иреү (ҡар), ҡыҙыу (эш), йәшерен (ойошма), кипкән (бесән).**

46. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең лексемалашыуы нигеҙендә яһалған ҡушма сифаттарҙы билдәләгеҙ.
А. Сыбар (тауыҡ), ала (һыйыр), ерән (бейә).
Б. Елле-ямғырлы (көҙ), елле-буранлы (ҡыш).
В. **Сейә ҡыҙыл (төҫ), алма сыбар (ат), ерән ала (ҡолон).**

47. Һөйләмдәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән сифаттарҙы күрһәтегеҙ.
А. Иҫле (бала), ҡотло (йорт), башлы (һуған).
Б. Эш һөйөүсән (кеше), түҙә алмаҫлыҡ (эҫелек), оҙон буйлы (спортсы).
В. **Иҫ киткес (матурлыҡ), ҡот осорҙай (хәл), баш ҡатырлыҡ (ваҡиға).**

48. Сифаттарҙың яһалыу юлдарын күрһәтегеҙ.
А. Лексик-семантик, һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу, лексик-синтаксик юлдар.
Б. Морфематик, аффикслашыу, нигеҙҙәрҙе ҡушыу юлдары.
В. **Лексик-семантик, фонологик, морфематик, лексик-грамматик, лексик-синтаксик юлдар.**

49. Һан төркөмсәләрен билдәләгеҙ.
А. Төп, ябай, ҡушма һандар.
Б. Төп, тамыр, яһалма һандар.
В. **Төп, кәсер, тәртип, бүлем, йыйыу, сама, үлсәм һандары.**

50. Яһалыштары буйынса һандарҙың төрҙәре.
А. Ябай, ҡушма һандар.
Б. Тамыр, яһалма һандар.
В. **Тамыр, ябай яһалма, ҡушма, парлы һандар.**

51. Һандарҙың морфологик категориялары.
А. Килеш категорияһы.
Б. Дәрәжә категорияһы.
В. **Эйәлек, хәбәрлек, килеш, һан категориялары.**

52. Һандарҙың яһалыу юлдары.
А. Морфематик, лексик-грамматик юлдар.
Б. Фонологик, морфематик юлдар.
В. **Морфематик, лексик-грамматик, лексик-синтаксик юлдар.**

53. Морфематик юл менән яһалған һандарҙы күрһәтегеҙ.
А. Ун алты, ун ете, алты йөҙ.
Б. Алтынсы, етенсе, унынсы.
В. **Алтмыш, етмеш.**

54. Нигеҙҙәр ҡушылыу ысулы менән яһалған һандарҙы күрһәтегеҙ.
А. Ун һигеҙ, ун туғыҙ, егерме.
Б. **Һикһән, туҡһан.**
В. Һигеҙ, туғыҙ, ун, мең.

55. Лексик-грамматик юл менән барлыҡҡа килгән һандарҙы күрһәтегеҙ.
А. Берәр, икешәр, һигеҙәр, йөҙәр.
Б. Бишенсе, унынсы, йөҙөнсө.
В. **Миллион, миллиард, триллион.**

56. Лексик-синтаксик юл менән барлыҡҡа килгән һандарҙы күрһәтегеҙ.
А. Бишле (галош), етеле (лампа), ҡырҡлы (үлсәм)
Б. **Ун биш, ете йөҙ, ҡырҡ мең**
В. Бөтөн, ярты, сирек, тиҫтә.

57. Алмаш төркөмсәләре.
А. **Зат, күрһәтеү, һорау, билдәләү, билдәһеҙлек, юҡлыҡ, эйәлек алмаштары.**
Б. Зат, күрһәтеү, һорау, билдәләү, юҡлыҡ алмаштары.
В. Зат, күрһәтеү, һорау, юҡлыҡ алмаштары.

58. Зат алмаштары төркөмөн билдәләргә.
А. Был, теге, ул, анау.
Б. **Ул, улар, мин, һеҙ.**
В. Кем, ни, нимә.

59. Күрһәтеү алмаштары төркөмөн билдәләргә.
А. Кем, нимә, ҡайҙа,ниндәй.
Б. Бөтә, барлыҡ, һәммә.
В. **Был, теге, ошо, бындай, ошондай.**

60. Һорау алмаштары төркөмөн билдәләргә.
А. Һәр кем, һәр бер, үҙе, бөтәһе.
Б. Әллә кем, әллә ни, кемдер.
В. **Нисек, ниндәй, ҡасан, ҡайҙа.**

61. Билдәләү алмаштары төркөмөн күрһәтергә.
А. Нимәлер, кемдер, ҡасандыр, ҡайҙалыр.
Б. Кем, ҡасан, нисек, нимә.
В. **Бөтәһе, барлығы, һәммәһе, һәр кем, һәр бер.**

62. Билдәһеҙлек алмаштары төркөмөн күрһәтергә.
А. Беҙ, һеҙ, улар.
Б. Анау, бынау, теге, шул.
В. **Теләһә кем, теләһә ни, әллә кем, әллә нимә.**

63. Юҡлыҡ алмаштары төркөмөн билдәләргә.
А. Ҡасандыр, ҡайҙалыр, кемдер, әллә кем, әллә ни.
Б. Ҡасан, ҡайҙа, кем, ни.

В. **Һис кем, һис ҡасан, һис ни, бер кем дә, бер нимә.**

64. Эйәлек алмаштары төркөмөн билдәләргә.
   А. Мин, һин, ул, беҙ, һеҙ.
   Б. **Минеке, һинеке, уныҡы, беҙҙеке, һеҙҙеке.**
   В. Кемдер, ниҙер, ҡайҙалыр, ҡасандыр.

65. Алмаштарҙың морфологик категориялары.
   А. Һан, килеш, модаллек категориялары.
   Б. Эйәлек, хәбәрлек, заман категориялары.
   В. **Һан, эйәлек, хәбәрлек, килеш категориялары.**

66. Лексик-синтаксик юл менән яһалған алмаштарҙы күрһәтегеҙ.
   А. Кем, ни, ҡасан, нимә.
   Б. Кемдер, ниҙер, ҡасандыр.
   В. **Һис кем, һис ни, һис ҡасан, бер кем дә, бер ни ҙә.**

67. Төп һандар төркөмөн билдәләргә.
   А. **Биш, йөҙ, мең, миллион.**
   Б. Бишәр, йөҙәр, меңәр.
   В. Йөҙәрләгән, миллионлап, меңәрләгән.

68. Тәртип һандары төркөмөн билдәләргә.
   А. Алтышар, берәр, унар, ҡырҡар.
   Б. Алтылап, унлаған, ҡырҡлап.
   В. **Алтынсы, унынсы, ҡырҡынсы.**

69. Йыйыу һандары төркөмөн билдәләргә.
   А. Икенсе, дүртенсе, етенсе, унынсы.
   Б. Икешәр, дүртәр, етешәр, унар.
   В. **Икәү, дүртәү, етәү, унау.**

70. Бүлем һандары төркөмөн билдәләргә.
   А. **Берәр, өсәр, бишәр, алтышар, меңәр.**
   Б. Берәү, өсәү, бишәү, алтау.
   В. Унлап, йөҙләгән, меңәрләгән.

71. Сама һандары төркөмөн билдәләргә.
   А. **Унлап, иллеләгән, ҡырҡ - илле, меңләгән.**
   Б. Унар, иллешәр, ҡырҡар, меңәр.
   В. Унау, етәү, бишәү.

72. Ҡылымдарҙың яһалышы буйынса төрҙәре.
   А. Тамыр, яһалма, ҡушма, күсмә ҡылымдар.
   Б. Тамыр, яһалма, ҡушма ҡылымдар.
   В. **Тамыр, яһалма, ҡушма, парлы, ҡабатлаулы, күсмә ҡылымдар.**

73. Тамыр ҡылымдар төркөмөн билдәләргә.
   А. Шаулы-, ятла-, артыл-.
   Б. **Бир-, баҫ-, күр-, ҡайт-.**
   В. Күгәр-, ҡыҙар-, һарғай-.

74. Яһалма ҡылымдар төркөмөн билдәләргә.
А. Күҙалла-, һаубуллаш-, асыулан-.
Б. **Елгәр-, ҙурай-, юғал-, берләш-.**
В. Уйла-, йүгер-, атла-.

75. Ҡушма ҡылымдар төркөмөн билдәләргә.
А. Аңла-, барла-, шаҡылда-.
Б. Бәрел- – һуғыл-, кил- – кит-, күрһә - нитһә.
В. **Буйһон-, ашатла-, һаубуллаш-, рәхим ит-.**

76. Парлы ҡылымдар төркөмөн билдәләргә.
А. Үҙһүҙлән-, бойор-, олғаш-.
Б. Болотла-, дуҫлаш-, йылын-.
В. **Бөгөл- – һығыл-, ин- – сыҡ-, ҡайтһа – нитһә.**

77. Ҡабатлаулы ҡылымдарҙы билдәләргә.
А. Ахылда-, ухылда-, бышылда-.
Б. Ҡайт- – кит-, мен- – төш-, килһә - нитһә.
В. **Мин-минлән-, әрәм-шәрәмлә-, көсәйгәндән-көсәйә.**

78. Ҡылымдарҙың яһалыу юлдары.
А. Лексик-семантик, морфематик, һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу, лексик-синтаксик юлдар.
Б. Лексик-семантик, морфематик, һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлдары.
В. **Лексик-семантик, фонологик, морфематик, лексик-грамматик, лексик-синтаксик юлдар.**

79. Лексик-семантик юл менән яһалған ҡылымдарҙы күрһәтегеҙ.
А. Ағарт-, баҫыр-, иҙра-.
Б. (Стенаны) аҡла-, (ергә) баҫ-, (балсыҡты) иҙ-.
В. **(Ғәйеплене) аҡла-, (гәзит) баҫ-, (халыҡтарҙы) иҙ-.**

80. Фонологик юл менән яһалған ҡылымдарҙы күрһәтергә.
А. (ишекте) ас-, (сәйҙе) эс-, (юлға) сыҡ-.
Б. (Май) йаҡ-, (шишмә) урғый, (ағасты) быс-.

В. **(Ауырыу) йоҡ-, (соҡор аша) ырғый, (сепрәкте) бес-.**

81. Аффикслашыу ысулы менән яһалған ҡылымдарҙы күрһәтергә.
А. Ашатла-, олғаш-, яҡшатлан-.
Б. Һау бул-, хөрмәт ит-, рәхмәт әйт-.
В. **нәҙегәй-, юғал-, ғорурлан-, ағар-.**

82. Нигеҙҙәрҙе ҡушыу ысулы менән яһалған ҡылымдарҙы күрһәтергә.
А. Ауырай-, еңеләй-, ҙурай-.
Б. Күңел ас-, хәл ит-, ҡарар ит-.
В. **Һаубуллаш-, үҙһүҙлән-, яҡшатлан-.**

83. Нигеҙҙәрҙе ишләү ысулы менән яһалған ҡылымдарҙы билдәләргә.
А. Ҡот ос-, иҫ кит-, күҙ төш-, хәл ин-.
Б. **Аша- – эс-, уйна- – көл-, бөгөл- – һығыл-.**
В. Байрам ит-, хуш бул-, кәңәш бир-.

84. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡылымдар.

А. Поезд көт-, ауылда бул-, бүлмәгә ин-.
Б. Ерһе-, кәмһет-, тамырлан-.
В. **Донъя көт-, азат ит-, балиғ бул-, юҡ ит-.**

85. Һөйләмдәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡылымдар.
А. Көн күр-, хәл йый-, күңел ас-.
Б. **Аҡыл кер-, йән көй-, еҫ тей-.**
В. Шатлан-, туғанлаш-, дағала-, яңыр-.

86. Ҡылымдарҙың грамматик категориялары.
А. Зат, һан, һөйкәлеш, заман, йүнәлеш, күләм категориялары.
Б. Зат, һан, һөйкәлеш, заман, йүнәлеш, барлыҡ-юҡлыҡ категориялары.
В. **Зат, һан, һөйкәлеш, заман, йүнәлеш, күләм, модаллек, барлыҡ-юҡлыҡ категориялары.**

87. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының үткән заман формаларын билдәләгеҙ.
А. Билдәле, билдәһеҙ үткән заман формалары.
Б. Тамамланған, тамамланмаған үткән заман формалары.
В. **Тамамланмаған, билдәле, билдәһеҙ, билдәле элек, билдәһеҙ элек, билдәле күптән үткән, билдәһеҙ күптән үткән заман формалары.**

88. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының тамамланмаған үткән заман формаларын билдәләгеҙ.
А. Килде, йөрөнө, эшләне, ҡайтты.
Б. Килгән, йөрөгән, эшләгән, ҡайтҡан.
В. **Килә ине, йөрөй ине, эшләй ине, ҡайта ине.**

89. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының билдәле үткән заман формаларын күрһәтегеҙ.
А. Сыға ине, йырлай ине, бейей ине.
Б. Ингән, сыҡҡан, йырлаған, бейегән.
В. **Инде, сыҡты, йырланы, бейене.**

90. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының билдәһеҙ үткән заман формаларын күрһәтегеҙ.
А. Менгән булған, төшкән булған, уҡыған булған.
Б. Менде, төштө, уҡыны, яҙҙы.
В. **Менгән, төшкән, уҡыған, яҙған.**

91. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының билдәле элек үткән заман формаларын күрһәтегеҙ.
А. Килде, китте, барҙы, ҡайтты.
Б. Килә ине, китә ине, бара ине, ҡайта ине.
В. **Килгәйне, киткәйне, барғайны, ҡайтҡайны.**

92. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының билдәһеҙ элек үткән заман формаларын күрһәтегеҙ.
А. Киткән, ҡайтҡан, яҙған.
Б. Киткәйне, ҡайтҡайны, яҙғайны.
В. **Киткән булған, ҡайтҡан булған, яҙған булған.**

93. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының билдәле күптән үткән заман формаларын күрһәтегеҙ.
А. Килде, ҡайтты, яҙҙы.
Б. Килә ине, ҡайта ине, яҙа ине.
В. **Килә торғайны, ҡайта торған булды, яҙыр ине.**

94. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының билдәһеҙ күптән үткән заман формаларын күрһәтегеҙ.
А. Һөйләгән, әйткән, килгән.
Б. Һөйләгән булған, әйткән булған, килгән булған.
В. **Һөйләр булған, әйтә торған булған, килә торған булған.**

95. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының хәҙерге заман формаларын билдәләгеҙ.

А. Йәшәй торғайны, уҡый торғайны, йырлай торғайны.
Б. Йәшәй ине, уҡый ине, йырлай ине.
В. **Йәшәй, уҡый, йырлай, ҡайта.**
96. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының билдәле киләсәк заман формаларын күрһәтегеҙ.
А. Йөрөр булған, һөйләр булған, ҡайтыр булған.
Б. Йөрөр, һөйләр, ҡайтыр, китер.
В. **Йөрөйәсәк, һөйләйәсәк, ҡайтасаҡ, китәсәк.**
97. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының билдәһеҙ киләсәк заман формаларын күрһәтергә.
А. Бирә ине, килә ине, яҙа ине, эшләй ине.
Б. Бирер ине, килер ине, яҙыр ине, эшләр ине.
В. **Бирер, килер, яҙыр, эшләр.**
98. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарын билдәләргә.
А. Уйлай, һөйлә, яҙҙы, уҡыған.
Б. Уйлаһа, һөйләһә, килһәләр.
В. **Уйла, һөйләһен, кил әле, рәхмәт яуһын, ҡайтһын ине.**
99. Шарт һөйкәлеше ҡылымдарын билдәләргә.
А. Килә, киләсәк, килә ине.
Б. Килде, килгән, килер, булыр.
В. **Килһә, килдениһә, килгән булһа, килер булһа.**
100. Ихтималлыҡ һөйкәлеше ҡылымдарын күрһәтегеҙ.
А. Ҡушһаң, әйтһәгеҙ, хәбәр итһәләр.
Б. Эшләр ине, килгән булыр ине, килә ине.
В. **Ҡушһаң, эшләр ине; әйтһәгеҙ, килгән булыр ине; хәбәр итһәләр, килә ине.**
101. Теләк-өндәү һөйкәлеше ҡылымдарын күрһәтегеҙ.
А. Барам, ҡайттыҡ, йырлаймын, яҙамын.
Б. Бар әле, ҡайт инде, яҙа бар.
В. **Барайым әле, ҡайтайыҡ инде, йырлағы килә, яҙаһым бар.**
102. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше ҡылымдарын күрһәтегеҙ.
А. Ҡайтырға, ҡайтып, ҡайтҡансы.
Б. Ҡайтыр, ҡайтасаҡ, ҡайта ине, ҡайтыр ине.
В. **Ҡайтмаҡсы, ҡайтмаҡ була, ҡайтмаға итә, ҡайтырға булды.**
103. Ҡылым төркөмсәләрен күрһәтегеҙ.
А. Инфинитив, уртаҡ ҡылым, исем ҡылым, сифат ҡылым, рәүеш (хәл) ҡылым.
Б. Инфинитив, исем ҡылым, сифат ҡылым, рәүеш ҡылым, хәл ҡылым.
В. **Инфинитив, исем ҡылым, сифат ҡылым, рәүеш (хәл) ҡылым.**
104. Ҡылымдың йүнәлеш категорияһы формаларын күрһәтегеҙ.
А. Йыу, йыуыштыр, йыуғыла, йыуыңҡыра.
Б. Йыу, йыуҙы, йыуған, йыуа, йыуыр.
В. **Йыу, йыуын, йыуыл, йыуыш, йыуҙыр.**
105. Инфинитив формаларын билдәләгеҙ.
А. Уйла-, ер һөр-, эшкә бар-.
Б. **Уйларға кәрәк, ер һөрөүгә тотондо, бармаға итә.**
В. Уйлау кәрәк, ер һөрөү эшенә тотондо, бармаҡ булды.
106. Исем ҡылым формаларын билдәләгеҙ.
А. Алмаҡсы була, бирер, йөрөнө.
Б. Ҡармаҡ һала, көтөү ҡайтты, алыш башланды.
В. **Алмаҡ күрке – бирмәк. Ни хәлле йөрөш, бабай? Әбейҙең әкиәт һөйләүе.**
107. Сифат ҡылымдың үткән заман формаларын билдәләгеҙ.
А. Һабантуйҙа көрәшкән, кешеләр күргән, ауылда йәшәгән.
Б. **Көрәшкән батырҙар, күргән кеше, йәшәгән урыны.**
В. Көрәшкән булған, күргән булған, йәшәгән булған.
108. Сифат ҡылымдың хәҙерге заман формаларын билдәләгеҙ.

А. Яҙыу эше, көтөү менән ҡыуып етеү – мәшәҡәтле хәл.
Б. Күренекле яҙыусы, көтөүсе малын ҡыуа, бара торған булған.
В. **Хат яҙыусы кеше, ҡунаҡтарҙы көтөүсе хужалар, бара торған (урын).**

109. Сифат ҡылымдың киләсәк заман формаларын билдәләгеҙ.
А. Теге урынға барыр, ул бөгөн ҡайтыр, самолет тиҙҙән осор.
Б. **Барыр урын, ҡайтыр кеше, осор ваҡыт.**
В. Барыр булған, ҡайтыр ине, осор булған.

110. Сифат ҡылымдың киләсәк заман формаларын билдәләргә.
А. Яҡты киләсәк көтә.
Б. Ул беҙҙә уҡыясаҡ, улар ауылда эшләйәсәк, ҡунаҡтар киләсәк.
В. **Мин уҡыясаҡ китап, ауылда эшләйәсәк йәштәр, киләсәк ҡунаҡ.**

111. Сифат ҡылымдың киләсәк заман формаларын билдәләргә.
А. Бараһы ине, күрәһе ине, киләһе ине.
Б. **Бараһы урын, күрәһе кеше, киләһе ҡунаҡ.**
В. Бараһы килә, күрәһе килә, киләһе бар.

112. Рәүеш (хәл) ҡылым формаларын билдәләргә.
А. Ҡуш ҡуллап ризалашты, тәү башлап эшләне.
Б. **Яйлап эшләй, барлап сыҡты, семәрләп сигә.**
В. Яйлай, барлай, семәрләй.

113. Рәүеш (хәл) ҡылым формаларын билдәләгеҙ.
А. Бара-тора, тора-бирә, ауа-түнә.
Б. **Бара йөрө, тора килеп, ауа яҙҙы, һөйләй ултыр.**
В. Бара, тора, ауа, һөйләй.

114. Ҡайһы төркөмдә рәүеш (хәл) ҡылым формалары дөрөҫ бирелмәгән.
А. Өҙгәнсә һуҙҙы, ул әйткәнсә эшләнек, эш мин уйлағанса булманы.
Б. **Өҙгәнсе тартты, ул әйткәнсе эшләй, беҙ уйлағансы килеп сыҡты.**
В. Епте ул өҙгәнсе, мин түгел. Был турала ағаһы әйткәнсе, ул түгел.

115. Ҡайһы төркөмдә рәүеш (хәл) ҡылым формалары дөрөҫ бирелмәгән.
А. Мин бригадирға әйткәнсе, һеҙ китмәгеҙ. Мин һөйләшкәнсе, көтөп тороғоҙ.
Б. **Мин әйткәнсә, улар китеп өлгөргәйне. Беҙ һөйләшкәнсә, һеҙ китмәй торогоҙ.**
В. Ағайым әйткәнсе, беҙ түгел. Уның менән ағайым һөйләшкәнсе, апайым түгел.

116. Ҡылымдың күләм категорияһы формаларын билдәләргә.
А. Китһә, китмәк була, китәйем, китһен.
Б. Китергә итә, китте, китер, киткән.
В. **Китергә тора, китеңкерә-, киткелә-, китә һалды.**

117. Ҡылымдың модаллек категорияһы формаларын билдәләргә.
А. Ҡайтыу, ҡайтыусы, ҡайтҡас, ҡайтырға.
Б. Ҡайтсы, ҡайтҡан, ҡайта, ҡайтһа.
В. **Ҡайтҡансы, ҡайтҡандыр, ҡайта алмай, ҡайтһасы.**

118. Яһалышы буйынса рәүештәрҙең төрҙәре.
А. Тамыр, яһалма, ҡушма, парлы, күсмә рәүештәр.
Б. **Тамыр, яһалма, ҡушма (берекмә, теркәлмә), парлы, ҡабатлаулы, күсмә рәүештәр.**
В. Тамыр, яһалма, ҡушма, парлы рәүештәр.

119. Тамыр рәүештәрҙе билдәләгеҙ.
А. Иртә, кис, таңға, йәйгә.
Б. Бөгөн, быйыл, ҡасан.
В. **Күп, шәп, яй, аҙ, тиҙ, йыш.**

120. Яһалма рәүештәр төркөмөн күрһәтергә.
А. Йәйен, ҡышын, яҙын, көҙөн.
Б. Кискә, төшкә, яҙға, көҙгә.

В. **Ауылса, айлап, игенләтә, йылылай.**
121. Берекмә ҡушма рәүештәр төркөмөн күрһәтергә.
А. Юҡ-барға, ара-тирә, илке-һалҡы.
Б. Кисен, төнөн, кискә, төнгә.
В. **Бөгөн, быйыл, ҡасан, иртәнсәк.**
122. Теркәлмә ҡушма рәүештәр төркөмөн күрһәтергә.
А. Тиктомалға, былтыр, берһегөн.
Б. Иптәштәрсә, боронғоса, элек-электән.
В. **Аяҡ үрә, баш түбән, йәй буйы.**
123. Парлы рәүештәрҙе күрһәтегеҙ.
А. Арҡыс-торҡос, көндән-көн, әҙ-мәҙ.
Б. **Көн-төн, арлы-бирле, ара-тирә.**
**В.** Көн элгәре, йөҙ түбән, бер юлы.
124. Ҡабатлаулы рәүештәрҙе билдәләргә.
А. Үрле-ҡырлы, юҡ-барға, баштан-аяҡ.
Б. Тәү баштан, бер юлға, ошо арала.
В. **Саҡ-саҡ, ваҡыт-ваҡыт, әүеш-тәүеш, асыҡтан-асыҡ.**
125. Күсмә рәүештәрҙе билдәләгеҙ.
А. Оҙон-оҙаҡ, кисә-бөгөн, ҡара-ҡаршы.
Б. Яңыса, тоҡлап, аҡсалата, йәшләй.
В. **Иртәгә, көскә, башта, көтмәгәндә, шул арала.**
126. Рәүештәрҙең лексик-семантик төркөмсәләре.
А. Аныҡлаусы, хәл рәүештәре.
Б. **Аныҡлаусы, хәл, ваҡыт, урын, оҡшатыу, күләм-дәрәжә, сәбәп-маҡсат рәүештәре.**
В. Хәл, ваҡыт, урын, оҡшатыу, күләм-дәрәжә, сәбәп-маҡсат рәүештәре.
127. Рәүештәргә хас морфологик категориялар.
А. Һан, килеш, эйәлек, хәбәрлек категориялары.
Б. Килеш, дәрәжә категориялары.
В. **Дәрәжә категорияһы.**
128. Дәрәжә категорияһы менән үҙгәрә алыусы рәүештәрҙе билдәләргә.
А. Көскә, ялан баш, бер көнө.
Б. Кешеләрсә, икеләтә, сәғәтләп.
В. **Ҡапыл, яй, һуң, көндөҙ, тиҙ, бында.**
129. Модаль һүҙҙәрҙең яһалышы буйынса бүленеше.
А. Тамыр, яһалма, ҡушма модаль һүҙҙәр.
Б. Тамыр, яһалма, ҡушма, парлы, ҡабатлаулы, күсмә модаль һүҙҙәр.
В. **Төп, исемдәш, ҡылымдаш модаль һүҙҙәр.**
130. Исемдәш модаль һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
А. Күрәһең, әйткәндәй, булмаһа.
Б. Бар, юҡ, түгел.
В. **Асылда, ғәҙәттә, дөрөҫ, тәбиғи, минеңсә, беренсенән.**
131. Ҡылымдаш модаль һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
А. Бар, бәлки, юҡ, түгел.
Б. Ахыры, билдәле, берҙән, ҡыҫҡаһы.
В. **Булмаһа, күрәһең, әйтәйек, тимәк.**
132. Төп модаль һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
А. Ахыры, ғәҙәттә, һинеңсә, киреһенсә.
Б. Күрәһең, әйткәнсә, етмәһә.
В. **Бар, юҡ, түгел, бәлки.**
133. Бәйләүестәрҙең яһалышы буйынса бүленеше.
А. Тамыр, яһалма бәйләүестәр.

Б. Тамыр, яһалма, күсмә бәйләүестәр.
В. **Төп, исемдәш, ҡылымдаш бәйләүестәр.**
134. Исемдәш бәйләүестәрҙе билдәләгеҙ.
А. Өсөн, кеүек, һымаҡ, ҡәҙәр.
Б. **Тыш, буйы, башҡа, хаҡында, сәбәпле.**
В. Ҡарағанда, ҡарай, ҡарамайынса, тип.
135. Ҡылымдаш бәйләүестәрҙе билдәләгеҙ.
А. **Була, күрә, ҡарай, ҡарата, ашыу.**
Б. Кеүек, һайын, өсөн, ҡәҙәр.
В. Арҡаһында, башҡа, хаҡта, төҫлө.
136. Төп бәйләүестәрҙе билдәләргә.
А. Башлап, буйлап, күрә, ҡарай.
Б. Буйы, хәлдә, мәлдә, самаһы.
В. **Өсөн, менән, кеүек, һымаҡ, kәҙәр.**
137. Теҙеү теркәүестәренең төркөмсәләре.
А. Йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, ҡабатлаулы теркәүестәр.
Б. Йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү теркәүестәре.
В. **Йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү һәм аныҡлау теркәүестәре.**
138. Эйәртеү теркәүестәренең төркөмсәләре.
А. Шарт, сәбәп, һөҙөмтә, оҡшатыу теркәүестәре.
Б. **Шарт, сәбәп, һөҙөмтә, кирелек, оҡшатыу теркәүестәре.**
В. Шарт, сәбәп, һөҙөмтә, оҡшатыу-сағыштырыу теркәүестәре.
139. Теҙеү теркәүестәрен билдәләгеҙ.
А. Сөнки, әгәр, шунлыҡтан.
Б. Гүйә, шулай итеп, шуға күрә.
В. **Һәм, йәғни, әммә, йә-йә.**
140. Эйәртеү теркәүестәрен билдәләгеҙ.
А. Йә-йә, берсә-берсә, әле-әле.
Б. **Әгәр, сөнки, гүйә, шунлыҡтан.**
В. Һәм, әммә, ләкин, тик.
141. Киҫәксәләрҙең семантик төркөмсәләре.
А. Көсәйтеү, раҫлау, сикләү, икеләнеү, һорау, билдәләү, оҡшатыу-сағыштырыу, йөкмәтеү киҫәксәләре.
Б. Көсәйтеү, раҫлау, икеләнеү, һорау, билдәләү, йөкмәтеү киҫәксәләре.
В. **Көсәйтеү, раҫлау, сикләү, билдәләү, күрһәтеү, сағыштырыу киҫәксәләре.**
142. Ымлыҡтарҙың семантик төрҙәре.
А. Эмоциональ ымлыҡтар, императив һүҙҙәр, саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәре.
Б. Эмоциональ ымлыҡтар, императив һүҙҙәр, саҡырыу һүҙҙәре.
В. **Эмоциональ ымлыҡтар, императив һүҙҙәр.**
143. Эмоциональ ымлыҡтарҙы билдәләгеҙ.
А. Һәү-һәү, һәукәш-һәукәш, бәр-бәр.
Б. Йә, әйҙә, әү, әйҙүк.
В. **Эх, их, әһә, уф, ах, уй, абау.**
144. Императив һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
А. Аһ, ах, ай-һай, их, уй.
Б. Бес-бес, маһ-маһ, һәү-һәү, сип-сип.
В. **Эй, йә, әйҙә, әү, сеү, ҡуй, ҡана.**
145. Саҡырыу һүҙҙәрен билдәләгеҙ.
А. Эй, һәй, әү, әйҙә, сеү, ҡуй.
Б. Ай, ах, их, уф, ай-һай.
В. **Һәү-һәү, маһ-маһ, гәлә-гәлә, бәр-бәр.**
146. Оҡшатыу һүҙҙәренең семантик төрҙәре.

А. Тамыр, яһалма оҡшатыу һүҙҙәре.
Б. Яңғыҙ, ҡабатлаулы, парлы оҡшатыу һүҙҙәре.
В. **Өноҡшаш һәм һыноҡшаш һүҙҙәр.**

147. Өноҡшаш һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
А. Леп-леп, зыр-зыр, ем-ем, балҡ.
Б. Маһ-маһ, һоп-һоп, һәү-һәү.
В. **Сыр-сыр, геү-геү, селтер-селтер, шығыр-шығыр.**

148. Һыноҡшаш һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.
А. Ғыж-ғыж, пырх, шыбыр-шыбыр, тып-тып.
Б. Мырҡ-мырҡ, сут-сут, ҡарҡ-ҡарҡ, һау-һау.
В. **Йәлп, мөлдөр-мөлдөр, ялт-йолт, гөлт.**

149. Оҡшатыу һүҙҙәренең яһалыштары буйынса төрҙәре.
А. Тамыр, яһалма, ҡушма оҡшатыу һүҙҙәре.
Б. Тамыр, яһалма, ҡушма, күсмә оҡшатыу һүҙҙәре.
В. **Тамыр, яһалма, парлы, ҡабатлаулы оҡшатыу һүҙҙәре.**

150. Ымлыҡтарҙың яһалыштары буйынса төрҙәре.
А. Тамыр, яһалма, ҡушма ымлыҡтар.
Б. Тамыр, яһалма, ҡушма, күсмә ымлыҡтар.
В. **Тамыр, парлы, ҡабатлаулы, күсмә ымлыҡтар.**

## Синтаксис

1. ***Синтаксис фәне нимәне өйрәнә?***
1) һүҙҙәр яһалышы
2) һүҙҙәрҙе төркөмләү
3) һүҙҙәр һәм һөйләмдәр бәйләнеше +
4) һүҙлек байлығы

**2. Һөйләмдәр, һүҙбәйләнештәр төҙөлөшөн ниндәй фән өйрәнә?**
1) морфология;
2) фонетика;
3) лексика;
4) синтаксис +

**3. Тамамланған уй-фекерҙе белдергән һүҙҙәр теҙмәһе нимә ул?**
1) һүҙ;
2) һүҙбәйләнеш;
3) һөйләм +
4) ҡушма һүҙ.

**4. Ниндәй һүҙ төркөмдәре һөйләм киҫәге була ала?**
а) ярҙамсы һүҙ төркөмдәре;
б) үҙ аллы һүҙ төркөмдәре; +
в) модаль һүҙҙәр, ымлыҡтар.

**5. *Ике-икең - дүрт* һөйләмендә аҙаҡҡы һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?**
1) эйә
2) хәбәр +
3) тултырыусы
4) аныҡлаусы

**6. Һөйләмдә ниндәй һөйләм киҫәге бер һүҙгә лә буйһонмай?**
1) эйә +
2) хәбәр

3) тултырыусы
4) хәл.

**7.** ***Алыҫта атлы күренде*** **һөйләменең эйәһе ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?**
1) исем;
2) ҡылым;
3) сифат; +
4) алмаш.

**8. Ойоштороусы нигеҙенең иҫәбенә ҡарап, һөйләмдәр ниндәй төрҙәргә бүленә?**
1) бер составлы – ике составлы +
2) ябай – ҡушма
3) тулы – кәм
4) йыйнаҡ – тарҡау

**9. Теҙмә бәйләнеште ниндәй сара белдерә?**
1) бәйләүес һәм бәйләүес һүҙҙәр
2) килеш ялғауҙары
3) эйәртеүсе теркәүестәр
4) теҙеү теркәүестәре +

**10. Телмәрҙең бер фраза баҫымы менән әйтелгән, һөйләмдең башҡа компоненттарынан паузалар ярҙамында айырыла торған үҙенсәлекле ритмик-мелодик һәм семантик-синтаксик берәмек нимә тип атала?**
1) фраза
2) синтагма +
3) баҫым

**11. «Хәбәр – тултырыусы (хәл) – эйә» тибындағы конструкция нисек атала?**
1) конверсия
2) сингармонизм
3) инверсия +

**12. Һүҙбәйләнештәрҙә башҡарылыу бәйләнеше булған юлды билдәләгеҙ.**
1) күҙ килде
2) алтын күҙ
3) әсәйемдәргә килде +
4) әсәйемдең күлдәге

**13. Ағайымдың хәле** **ауыр ине.**Билдәләнгән һүҙҙәр ниндәй һүҙбәйләнеш төрөнә ҡарай?
1) ярашыу
2) башҡарылыу
3) йәнәшәлек
4) һөйкәлеү +

**14.Эйәртеүсе киҫәге сифат, эйәреүсе һүҙе исем булған һүҙбәйләнештәрҙе билдәләгеҙ.**
1) Йәйге имтихан, етенсе йыл, яҡшы баһа
2) Студенттарҙан һин, уҡыусының үҙе
3) Һүҙгә оҫта, тауҙан бейек, балаға аңлайышлы +
4) Мәктәптә эшләү, дуҫты осратыу, эшкә барыу

**15.Эйәртеүсе һүҙе һан булған һүҙбәйләнештәрҙе билдәләгеҙ:**
1) Йәйге имтихан, етенсе йыл, яҡшы баһа
2) Студенттарҙан һин, уҡыусының үҙе

3) Алдан өсөнсө, һеҙгә икешәр +
4) Мәктәптә эшләү, дуҫты осратыу, эшкә барыу

**16.Түбәндәге һүҙбәйләнештә эйәреүсе һүҙ эйәртеүсе һүҙгә ниндәй юл менән бәйләнгән? *Мәктәптән ҡайтыу.***
1) йәнәшәлек 3) һөйкәлеү
2) башҡарылыу + 4) ярашыу

**17.Эйәртеүсе киҫәге алмаш булған һүҙбәйләнештәрҙебилдәләгеҙ:**
1) Йәйге имтихан, етенсе йыл, яҡшы баһа
2) Студенттарҙан һин, уҡыусының үҙе +
3) Алдан өсөнсө, һеҙгә икешәр
4) Мәктәптә эшләү, дуҫты осратыу, эшкә барыу

**18. Эйәртеүсе һүҙ эйәреүсе һүҙҙең билдәле бер килештә килеүен талап иткән бәйләнеш:**
1) йәнәшәлек
2) һөйкәлеү
3) башҡарылыу +
4) ярашыу

**19. Һүҙбәйләнештең төрөн билдәләге: *етенсе йыл***
1) йәнәшәлек +
2) һөйкәлеү
3) башҡарылыу
4) ярашыу

**20. Бирелгән һүҙбәйләнештә эйәртеүсе һүҙҙе табығыҙ: *уҡырға ярата.***
1) уҡырға
2) ярата +

**21. Һөйкәлеү юлы менән бәйләнгән һүҙбәйләнештәрҙе күрһәтегеҙ.**
1) мин яҙам, ул килә, балалар уҡыйҙар
2) Ватанды яратыу, әсәйемә кәрәк
3) Ике быуат, өсөнсө курс, бәхетле ғүмер
4) студенттың дәфтәре, факультеттың еңеүе +

**22. Һүҙҙәр араһындағы теҙмә бәйләнеште билдәләгеҙ**:
1) илде яратыу
2) әсәйемдең яулығы
3) уҡыныҡ һәм яҙҙыҡ +
4) ауылға ҡайтыу

**23.** ***Көн һайын килеү*** **һүҙбәйләнешендә бәйләүсе сара**
1) йәнәшәлек
2) бәйләүес +
3) исем ҡылым формаһы
4) төп килеш формаһы

**24. Һүҙбәйләнеште билдәләгеҙ.**
1) ҡыҙыл алма +
2) Ҡарлуғас – етеҙ ҡыҙ

3) ер eləге
4) Салауат районы

**25.** ***Ике аҙнанан ҡайтыу*** **һүҙбәйләнешенең төҙөлөшөн билдәләгеҙ.**
1) ябай
2) ҡушма +

**26.** ***Башлы-күҙле булыу*** **һүҙбәйләнешенең төрөн билдәләгеҙ.**
1) ирекле
2) синтаксик үҙ аллы булмаған
3) фразеологик һүҙбәйләнеш +

**27.** ***Зөһрәнең тауышына хәтлем әсәһенеке (Р.Солтангәрәев*)**. Һөйләмдең хәбәрен табып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән булыуын билдәләгеҙ.**
1) исем + 3) сифат
2) ҡылым 4) алмаш

**28.Йыр - кеше рухының шиңмәç сәскәһе, һүнмәç хазинаһы.** ***Һөйләмдә һыҙыҡ ҡуйылышы ҡайһы яуап менән аңлатыла.***
1) эйә менән хәбәр бер үк һүҙ төркөмөнән +
2) дөйөмләштереүсе һүҙ алдынан һыҙыҡ ҡуйыла
3) өçтәлмәлектән һуң һыҙыҡ ҡуйыла
4) инеш һүҙҙән һуң һыҙыҡ ҡуйыла

**29.Ярар, бәләкәс әле ул. (З.Биишева).** ***Һөйләмдең хәбәрен табып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән булыуын билдәләгеҙ.***
1). Исем 3). Сифат +
2). Һан 4). Алмаш

**30**. ***Атаменән әсә - алтын ҡанат*** **һөйләменең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?**
1) исем + 3) ҡылым
2) сифат 4) рәүеш

**31.*Һалдатҡа биргән антты боҙоу - <u>енәйәт</u>, иң ҙур хыянат*** **һөйләмендәге аçтына һыҙылған һүҙ һөйләмдең ниндәй киçәге булып килгән?**
1) Тултырыусы 3) Ҡылым
2) Эйә 4) Хәбәр +

**32.*Һөйләмдең нигеҙен (төҙөлөшө буйынса) тәшкил иткән иң кәрәкле, әһәмиәтле киçәктәр ниндәй?***
1) баш киçәктәр + 3) модаль киçәктәр
2) эйәрсән киçәктәр 4) актуаль киçәктәр

33. **Бөгөн беҙ <u>еләк</u> ашаныҡ. Билдәләнгән һүҙ ниндәй һөйләм киçәге?**
1) хәбәр 3) аныҡлаусы
2) тултырыусы + 4) хәл

**34. Алмашты табып, ниндәй һөйләм киçәге икәнлеген билдәләгеҙ.**
***Ҡояш сығыуға, ауыл уларҙан тамам таҙартылды*** **(З.Биишева)**
1) аныҡлаусы 3) хәл
2) тултырыусы + 4) хәбәр

**35. Исемдәр һөйләмдең ниндәй киҫәге була ала?**
1) баш киҫәктәре;
2) эйәрсән киҫәктәре;
3) бөтә киҫәктәре лә булып килә ала.+
